ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

15-21 июль (майай) 2023

№27 (1069)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәшнәп йәшәр саҡтарында...**



2

**Бында күп нәмә баһаһын юғалта,**

**иң ҡиммәтлеһе - ғүмер, ғаилә, тыныс тормош**



8-9

**Ижади эҙҙәре ҡалды**



11

**Дауалауға ҡарағанда...**

**сирҙе иҫкәртеү яҡшыраҡ**



13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар!* Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, 2023 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән бергә булыуығыҙҙы баһалайбыҙ, рәхмәт әйтәбеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар булһа, әйтегеҙ: улар 15 августҡа тиклем яҙылып, сентябрҙән алдыра башлай ала - 4 айға яҙылыу хаҡы 532 һум 40 тин. Шулай уҡ ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2024 йылдың тәүге яртыһына ваҡытынан алда 771 һум 12 тингә яҙылырға мөмкин. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн шәхси хужалыҡтарҙа башҡорт аты аҫрауға иғтибар арта бара. Аттың иң тоғро дуҫы булыуын хәтеренә төшөрәме халҡыбыҙ, әллә кәсеп өсөн дә килемлеме был шөғөл?

***Радий ХӘБИРОВ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы:*** Башҡорттарҙың тормошонда уларҙың бөтөн тарихы буйынса ышаныслы һәм тоғро дуҫына әйләнгән ат айырым урын алып тора. Юҡҡа ғынамы ни, башҡорт халҡының рухи ҡомартҡыларынан булған "Урал батыр" һәм "Аҡбуҙат" эпостарының да төп геройҙары иҫәбендә - ат. Яугир ата-бабаларыбыҙ - легендар "төньяҡ амурҙары" һәм Миңлеғәли Шайморатовтың 112-се дивизияһы атлылары айырылмаҫ юлдаштары менән яу юлдарын үтә...

Беҙҙең өсөн башҡорт аты иң тоғро дуҫ. Ул талымһыҙ, ләкин бик сыҙам һәм көслө. Беҙгә бергәләп йылҡысылыҡты үҫтереү буйынса нимәләр эшләргә кәрәклекте уйлашырға ваҡыт. Республикала башҡорт тоҡомло атты өйрәнеү буйынса институт булдырыу кәрәктер, тип уйлайым. Был беҙгә башҡорт аты мәсьәләһенә киңерәк мәғәнәлә ҡарарға, ҡымыҙсылыҡты ла, тимерселек һәм ҡайыш-сбруй изделиеларын да, башҡа төр кәрәк-яраҡ етештереүҙе лә үҫтереү мөмкинлеге бирә.

Тарихи мәғәнәлә башҡорт аты - ул беҙҙең бөгөнгөнө ата-бабалар, уларҙың тарихы, мәҙәниәте һәм традициялары менән тоташтырып тороусы күпер ул. Баймаҡ районында үткәрелеүсе фестиваль - мәҙәниәт, спорт һәм ҡымыҙ ғына түгел, бында фән һүҙе лә булырға тейеш. Урындағы тәү тоҡом башҡорт аттарын үҫтереү зарурлығы - бәхәсһеҙ.

Башҡорт тарихында башҡорт аттарының ни тиклем әһәмиәтле булыуы хаҡында Шүлгәнташ мәмерйәһе диуарҙарындағы тарихҡа тиклемге төшөрөлгән ҡырағай һәм ҡулға эйәләштерелгән боронғо ат һүрәттәре лә асыҡ һөйләп тора. Бына шулай, тәү тормош аттары ғүмер буйына бөтөн тарихы дауамында башҡорт халҡы менән "ҡулға-ҡул" тотоношоп килә... Йылҡысылыҡ бөгөн ысын мәғәнәһендә иҡтисад һәм социаль өлкәләрҙә, тарихыбыҙҙа һәм мәҙәниәтебеҙҙә мөһим роль уйнай.

***Әйткәндәй, 2023 йылдың 3 июлендә Радий Хәбиров Башҡортостанда "Башҡорт аты" башҡорт тоҡомло аттарҙы өйрәнеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты булдырыу хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Хәйерле сәғәттә!***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТӨКӨРӨНӨП ЙӨРӨМӘ!

**Ярославль өлкәһендә административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы законға йәмәғәт урындарында төкөргән өсөн 1,5 мең һум, законды ҡабаттан боҙған осраҡта 3 мең һум штраф һалыныуы тураһында пункт индерелгән.**

"Урамда, йәмәғәт урындарында төкөрөнөп йөрөгән өсөн штраф һалыу тәжрибәһен беҙгә лә өйрәнергә кәрәк, - тип үҙ фекерен белдерҙе Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып Ярославль өлкәһендә индерелгән яңылыҡҡа ҡарата Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. - Урамда төкөрөп йөрөү - тәү сиратта эстетика, мәҙәнилек һәм тирә-йүндәгеләргә хөрмәт мәсьәләһе. Мәҙәни кешеләр үҙҙәрен улай тотмай, ә тәртипһеҙ кешене үҙенең ҡылығы тураһында уйланырға мәжбүр итергә кәрәк. Сирленең төкөрөгө инфекция сығанағы ла булыуы ихтимал. Ярославль депутаттарының башланғысын ҡыҙыҡлы тип иҫәпләйем. Ярославль өлкәһендә әлеге яңылыҡты нисек тормошҡа ашырыуҙарын иғтибар менән күҙәтеп барырбыҙ. Ғөмүмән, был тәжрибәне өйрәнергә, бәлки, иғтибарға алырға кәрәктер".

Парламент спикеры һүҙҙәренсә, таҙалыҡ һәр ҡаланың биҙәге булып тора. "Төкөрөккә баҫыу бер кемгә лә оҡшамай. Барыһы ла таҙа йәшәүҙе хуп күрә, - тине Константин Толкачев. - Шуға, штраф штраф өсөн түгел, ә йәмғиәттә үҙенде мәҙәни тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу өсөн индерелә".



12+

✓ *Йөрәгендә хөсөт йөрөтөүсе ғәйбәт таратыуҙан, яла яғыуҙан, араларҙы боҙоуҙан, хәйлә ҡороуҙан, этлек эшләүҙән, кешеләрҙе дошманлаштырыуҙан, ғаиләләрҙе тарҡатыуҙан кинәнес таба, ошо юлда ҙур "уңыштарға" ла өлгәшә.*



ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҺИНДӘ КӨНСӨЛЛӨКТӨҢ НИНДӘЙЕ?

**Һин башҡаларҙың уңыштарына, яҡшы сифаттарына ихлас ҡыуанаһыңмы? Күркәм холоҡло кешеләр менән осрашҡандан һуң үҙ ҡылыҡтарыңа тәнҡит күҙлеге аша ҡарап, үҙ-үҙеңде тәрбиәләргә тотоноп китәһеңме? Һиндә бындай ынтылыш бар икән, тимәк, күңелеңдә көнсөллөк ята барыбер. Әммә быныһы аҡ көнсөллөк тип атала.**

Ләкин кешеләр күңелендә икенсе төрлө көнсөллөк өҫтөнлөк итеп китә ҡайһы саҡ. Ҡөрьәндә ул "хәсәд" йәки "хөсөт" тип атала һәм ҡара көнсөллөктө аңлата. Ошо насар тойғоға эйә кеше башҡаларҙың уңыштарын күреп яфалана, уның таланты, байлығы, матурлығы, белеме, балалары, малы һәм башҡаларҙың юҡҡа сығыуын теләй. Йөрәгендә хөсөт йөрөтөүсе ғәйбәт таратыуҙан, яла яғыуҙан, араларҙы боҙоуҙан, хәйлә ҡороуҙан, этлек эшләүҙән, кешеләрҙе дошманлаштырыуҙан, ғаиләләрҙе тарҡатыуҙан кинәнес таба, ошо юлда ҙур "уңыштарға" ла өлгәшә, хатта оппоненттарын тимер рәшәткә артына бикләүгә һәм уларҙы физик юл менән юҡ итеүгә тиклем барып етә.

Бөгөнгө көндә хөсөт күптәрҙең булмышын зәғифләй. Был сир байын да, фәҡирен дә, хакимын да, ғалимын да, белемлене лә, белемһеҙҙе лә йәлләмәй. Шәхси аш бүлмәһенән алып етәкселәр кабинеттарына тиклем - бар урында рәхәтләнеп йәшәй, идара итә. Кешенең туймаҫ нәфсеһе, донъяның бар байлыҡтарын ҡулына төшөргән саҡта ла, туйыу белмәй, "ризаһыҙлыҡ" өсөн сәбәп эҙләй. Үҙенән яҡшыраҡтарҙы тапҡас, үҙ етешһеҙлеген йәшереүҙе көнсөллөктә таба.

Дин күҙлегенән ҡарағанда, хөсөт шайтандың иң һөҙөмтәле ҡоралдарының береһе. Тап көнсөллөк арҡаһында ерҙә беренсе енәйәт ҡылына, Әҙәм бәйғәмбәрҙең бер улы икенсеһен үлтерә. Йософ бәйғәмбәр көнсөл ағалары тарафынан ҡоҙоҡҡа ырғытыла, һуңынан ҡол итеп һатылып ебәрелә. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең һәм ислам диненең иң яуыз дошмандарының береһе Әбү Йәһилдең дошманлашыуы нигеҙендә ятҡан төп сифаттарҙың береһе көнсөллөк була. Ул Абдулла улы Мөхәммәттең бәйғәмбәр, Аллаһ рәсүле булыуын көнсөллөк арҡаһында ҡабул итә алмай. Иблис үҙе лә тәкәбберлек менән көнсөллөк арҡаһында фәрештәләргә дәрестәр биргән ғалимдан Аллаһы Тәғәлә ҡәһәрләгән затҡа әйләнә.

Һәр кеше - булмышы менән шәхес. Кеше үҙендә нимәнеңдер әҙерәк булыуын күреп көнләшә, зарлана, күберәк булыуын күреп, киреһенсә, тәкәбберләнә башлай икән, ул тере мәйеткә әйләнә. Ул, Раббыһының тәҡдиренә ҡаршы килеүсе, Аллаһы Тәғәләнең мәңгелек сифаттарын инҡар итеүсе һәм ғаиләлә, йәмғиәттә, дәүләттә, үҙ аңында фетнә тыуҙырыусы меҫкен затҡа әйләнә. "Хөсөт көнсөлдө ҡоро ботаҡтарҙы йотҡан ут кеүек йота", тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр. Кем үҙенең тыныслығын боҙа, кем үҙенең тормошон бысрата, кем үҙенең ҡәлебен яндыра, төн йоҡоларын юғалта, хәләл нәмәләрҙән ләззәт тапмай? Көнсөллөктән яфаланған кешеләр улар. Ундайҙар был донъяла уҡ үҙен утлы ситлеккә бикләй.

Раббыбыҙҙан һиҙәйәт һорайыҡ, ҡәлебтәребеҙҙе көнсөллөктән, тәкәбберлектән һаҡлайыҡ, күңелдәребеҙҙән насар уйҙарҙы ҡыуып сығарайыҡ, үҙебеҙҙең, халҡыбыҙҙың, кешелектең үҫеше, бәхете өсөн изгелектә берләшәйек, бер-беребеҙгә нәсихәт ҡылайыҡ, изге юлда ярышайыҡ, булғанына шөкөр итәйек.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**

КӨНАУАЗ

# ЙӘШНӘП ЙӘШӘР СAҠТАРЫНДА...

**Йәйҙең үҙенә ылыҡтырып торған хозурлығы менән бергә кеше ғүмерҙәренә янаған хәүеф-хәтәрҙәре лә күп шул: кемдәрҙер еләк-емеш, бәшмәк йыйырға сығып, аҙаша; кемгәлер талпан ҡаҙала, йылан саға; эҫе һуға, йәшен ата - әҙме ни моңһоҙлоҡ йә һаҡһыҙлыҡ күрһәтеүселәрҙе аҙым һайын һағалап тороусы бәлә-ҡазалар. Ләкин был һанап кителгән осраҡтар буйынса статистика бөтөнләй әҙ һәм кешенең иҫән ҡалыу ихтималлығы ла күберәк булһа, йәй осоронда һыуға батыусыларҙың хәле башҡасараҡ. Ҙур һыу менән ут моңһоҙлоҡто ғәфү итмәй. Ут менән һыуҙың ялы-ҡойроғо юҡ, тип бушҡа әйтмәгәндәр бит.**

Ҡыҫҡаһы, йәмле йәй осороноң фажиғәгә сәбәп булыусы иң күп осрағы - кешеләрҙең һыуға батып үлеүе. Шуныһы, берҙән, ғәжәп тә, аңлашылмай ҙа: йыл һайын күпләп ҡабатланып торған был ҡазанан һабаҡ алыусылар һаны кәмемәй. Ә бит һыу янында һаҡ булырға, таныш түгел урындарҙы урап үтергә саҡырып торған өндәмәләрҙе лә, киң мәғлүмәт сараларында, социаль селтәрҙәрҙә яҙылып, иҫкәртелеп тороуға ҡарамаҫтан, кеше быларҙы һанға һуҡмай, кемгәлер бәлә ҡағылған икән, минең менән ундай хәл булмаясаҡ, тип уйлай, үҙ мөмкинлектәрен самалап еткермәй. Икенсе төркөм "диңгеҙ һыуы тубыҡтан" тип уйлаусылар - нигеҙҙә, һуҡмыш килеш һыуға ырғырға яратыусылар.

Әйткәндәй, батып үлеүселәр буйынса йыл һайын бирелеп килгән статистикала ҡабатлана килеүенсә, фажиғәгә тарығандарҙың яртыһынан күберәге - эскән кешеләр. Әле ни бары йәй уртаһы ғына булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре күңелһеҙ хәбәрҙәр килтерә

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Бөгөн шәхси хужалыҡтарҙа башҡорт аты аҫрауға иғтибар арта бара. Аттың иң тоғро дуҫы булыуын хәтеренә төшөрәме халҡыбыҙ, әллә кәсеп өсөн дә килемлеме был шөғөл?***

***Марат АБДУЛОВ, эшҡыуар-фермер, Йылайыр районы ҡымыҙ фермаһы етәксеһе:*** Халҡыбыҙҙың борондан килгән йылҡысылыҡ традициялары бер осор онотола яҙып, көрсөк мәлдәре кисереп алғайны, бәхеткә, бөгөн республика етәкселеге тарафынан ауыл хужалығының был мөһим тармағын үҫтереү мәсьәләһе көн үҙәгенә ҡуйылды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың, йылҡысылыҡ ул милли традиция ғына түгел, иҡтисад үҫешенең дә бер өлөшө, тигән һүҙҙәре менән килешмәү мөмкин түгел. Ат аҫрау шөғөлөнә мин үҙем, мәҫәлән, тап бына ошо юҫыҡтан ҡарайым һәм оҙаҡ йылдар инде ҡымыҙ етештереү эшендәмен. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, башҡорттоң был шифалы батырҙар эсемлеге элек райондың "Көньяҡ Урал" совхозында етештерелде һәм ул ҙур ғына хужалыҡ ине: 100-ләгән ат аҫралды, ҡымыҙын бөтөн тирә-яҡ райондарҙан килеп алалар ине. Колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, фермала ла эш һүлпәнәйҙе, аттар һаны кәмене. Шуға күрә, район хакимиәте ҡымыҙ фермаһы эшен бөтөрмәйенсә һаҡлап алып ҡалыу һәм артабан дауам итеү бурысын миңә йөкмәтте. Ул саҡта инде был хужалыҡта ни бары 25 баш ҡына йылҡы малы тороп ҡалғайны. Үҙем менән ике улым, киленебеҙ бергәләп ғаилә фермаһы төҙөнөк, ярҙамсыларыбыҙ ҙа барлыҡҡа килде. Әкренләп эштәр йәнләнә башланы. Һауын бейәләр иҫәбе 70 башҡа еткерелде, ҡымыҙ бешеү цехы тейешле ҡорамалдар менән йыһазландырылды; малдарға аҙыҡ сифаты ла яҡшырҙы. Ҡымыҙ бешеүҙә мөһим булған етештереү технологияһы традицион халыҡ ысулына нигеҙләнә. Бейәләрҙе ике сәғәт һайын бәйләйбеҙ, унан йәш һөттө һөҙгәс, ҡымыҙ ҡуры ҡушып, ҡул менән бер сәғәттән ашыу бешәбеҙ. Әсеп сыҡҡас инде, әҙер ҡымыҙ шешәләргә тултырылып, һыуытырға ҡуйыла. Ҡымыҙҙың сифаты, тәмлелеге бейәләрҙең туҡланыу сифатына ла бик бәйле, шуға күрә малҡайҙарҙы ашатыуға нык иғтибар бирелә.

Беҙҙең ҡымыҙға һорау ҙур. Махсус заказдар буйынса Өфө, Мәскәү ҡалаларына оҙатыла, Ырымбур һәм Һамар өлкәләренән, Татарстандан, Санкт-Петербургтан да килеп алыусылар бар хатта. Ә инде эргә-тирә райондарҙан фермаға көнөнә 100-200-ләп һатып алыусы килә. Ҡыҫҡаһы, беҙҙең шифалы халыҡ эсемлеге хаҡында тирә-йүндә яҡшы беләләр. Өфөлә "19-сы ат заводы" тарафынан үткәрелгән конкурста тәүге йыл - 3-сө, ә инде киләһе тапҡыр 2011 йылда 1-се урын яулауыбыҙ, 2016 һәм 2021 йылдарҙа ғаилә фермаларын үҫтереү буйынса конкурс программаһында ике тапҡыр грант яулауыбыҙ үҙе үк беҙ етештергән ҡымыҙҙың сифаты хаҡында асыҡ һөйләп тора. Әйткәндәй, былтыр "Башҡорт аты" фестивалендә лә ҡатнаштыҡ, беҙҙең ҡымыҙ сифаты унда юғары баһа алды һәм "Иң тәжрибәле фермер" тигән номинацияла билдәләнде. Киләсәктә, Аллаһ бирһә, һауын бейәләрен 100 башҡа тиклем еткерергә иҫәп тотабыҙ. Дәүләт ярҙамы иҫәбенә хужалыҡта башҡорт тоҡомло аттар һанын арттырыуға өлгәштек. Тимәк, киләсәктә был шифалы эсемлегебеҙҙе тағы ла тәмлерәк һәм файҙалыраҡ итәсәк.

Шулай ҙа эштәр гел ал да гөл генә булып тормай, үкенескә. Үҙегеҙгә мәғлүм, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа йыш ҡына чиновниктар тарафынан уйлап сығарылған "йәнһеҙ" инструкция һәм ҡарарҙар, сейле-бешле закондар аяҡ салып ҡына тора. Бөгөн йылҡы ите, ҡаҙылыҡҡа һорау ҙур, ләкин беҙ малды әллә ҡайҙағы махсус пунктҡа алып барып һуйырға тейешбеҙ. Ышанаһығыҙмы, юҡмы, хатта бит хәҙер ҡиммәтле ашлама булған ат тиреҫенең (тиҙәге) сифаты өсөн дә сертификат талап итәләр! Көлөрһөң дә, иларһың да бына. Өҫтәмә килем бер ҙә ҡамасауламаҫ ине лә, тик бына ошондай инструкциялар арҡаһында ваҡыт әрәм итке килмәй. Беҙҙең өсөн иң мөһиме: һатып алыусыларҙың ҡымыҙыбыҙҙы маҡтап, күпләп алып китеүе, уларҙың ихлас рәхмәте һәм сәләмәтлеге.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә республикала капиталь ремонтлау федераль программаһы буйынса мәктәптәрҙе төҙөкләндереүҙәре хаҡында хәбәр итте. "2022 йылда 63 бинаны файҙаланыуға тапшырҙыҡ. Быйыл 77 бинаны ремонтлайбыҙ - һәр ерҙә лә эштәр әүҙем бара. 1 сентябргә барыһы ла әҙер булһын өсөн август урталарына тамамларға уйлайбыҙ. Баҡалы, Бөрө райондарында, Стәрлетамаҡта һәм башҡа муниципалитеттарҙа ике йылға иҫәпләнгән объекттарҙы ла тапшырабыҙ", - тип билдәләне ул.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға дәүләт наградалары тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында - Салауат Юлаев исемендәге ирекле батальон, "Барс" отрядтары яугирҙары һәм мобилизацияланғандар. Бөтәһе 36 кеше. Уларҙың дүртәүһе - генерал Шайморатов орденына, ҡалғандары генерал Шайморатов миҙалдарына лайыҡ булды.

✓Башҡортостан аграрийҙары уңыш йыйыуға төштө. Быйыл республиканың күпселек райондарында иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар ғәҙәттәгенән 10 көнгә алдараҡ өлгөрҙө. Быға иртәрәк сәсеү һәм июль айының эҫе булыуы йоғонто яһаны. Әле Стәрлетамаҡ, Ейәнсура, Ауырғазы, Дәүләкән, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез райондарында ужым бойҙайын, борсаҡ һәм ужым шипкәнен йыялар. Мең гектар майҙан сабылған. Ике мең тоннанан ашыу ашлыҡ һуғылған. Бөтәһе 1 миллион 760 мең гектар майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы культураларҙы урып йыйыу бурысы тора.

✓Ейәнсура районында "Ҡош юлы" республика конкурсы барышында "Ҡош Юлы. Балалар" балалар конкурсы уҙҙы. Байрамда район хакимиәте башлығы Дәмин Юланов, мәғариф министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева, проектҡа нигеҙ һалыусы Азамат Юлдашбаев һәм конкурстың режиссеры Минзәлә Яхина ҡатнашты. Йыр-моң бәйгеһендә 11 йәш бард ҡатнашты. Конкурста беренсе урынды Өфөнән Наилә Атнағолова яуланы, икенсе урынды - Өфөнән Тимерхан Кәбиров, өсөнсө урынды Ейәнсура районынан Ильяс Шәйәхмәтов алды.

✓Башҡортостанда мал аҙығы әҙерләү дауам итә. 11 июлгә мәғлүмәттәр буйынса, 174 мең тонна бесән һәм 494 мең тонна сенаж әҙерләнгән, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан. Белдереүҙәренсә, сенаж өсөн башлыса борсаҡ, клевер, люцерна файҙаланыла. Бөгөнгә 290 мең гектар майҙанда яҡын мал аҙығы үләне сабылған.



башланы ла инде. Мәҫәлән, быйылғы йыл башынан республикала 34 кеше батҡан, шуларҙың өстән бере - балалар. Былтыр иһә ошо уҡ осорға 18 кеше батһа, быйылғы һандың артыуы, күрәһең, көндәрҙең ифрат та эҫе тороуына бәйлелер. Үткән ял көндәре генә лә (8-9 июль) 9 кешенең батып үлеүе тап шул турала һөйләй булыр. Бәхеттәренә күрә, ике кешене ҡотҡарып ҡалалар. Мәҫәлән, шәмбе, 8 июлдә теркәлгән фажиғәләрҙе генә ҡарайыҡ: Дүртөйлөлә 2015 йылғы бала батып үлгән; Өфөлә - ике ир; Тәтешлелә быуала бер ир; Стәрлетамаҡта бер ир Ашҡаҙарҙа батҡан; Октябрьскийҙағы карьерҙа һыу ингәндә 1988 йылғы бер ҡатынды батҡан ерҙән ҡотҡаралар, ләкин ул дауаханала иҫенә килә алмай ята; Бишбүләк районында ауыл быуаһында 2004 йылғы йәш кеше батҡан; Кушнаренкола 1970 йылғы ир эскән килеш Ағиҙел йылғаһында һыу ингәнендә бата һәм ул 7-8 км һыу ағымы түбәненән табыла.

9 июлдә: Салауат районы Әй йылғаһында 1984 йылғы ир эскән килеш рөхсәт ителмәгән ерҙә һыуға төшөп бата; Көйөргәҙе районының ауыл быуаһында бер кешене батҡан еренән ҡотҡарып ҡалалар; Иглин районының ауыл быуаһында 1987 йылғы ир батып үлә, шулай уҡ эскелек арҡаһында.

Күренеүенсә, бәхетһеҙлек осраҡтарының күпселегендә "төп ролде башҡарыусы"лар - көслө һәм төптән уйлау һәләтенә эйә һымаҡ күренгән ирҙәр, әммә уларҙың тәбиғи көсөнән дә көслөрәк һәм аяуһыҙыраҡ стихия бар икәнен улар уйлап та бирмәгән йә булмаһа, эскелек арҡаһында аҡылдары юйылған, хәүеф-хәтәрҙе баһалау кимәле юҡҡа сыҡҡан, йәл. Ә бит гөрләтеп, айыҡ аҡыл менән яҡындары, туғандары, дуҫтары араһында йәшнәп йәшәр саҡтары ине...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## *ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

### *Бөгөн шәхси хужалыҡтарҙа башҡорт аты аҫрауға иғтибар арта бара. Аттың иң тоғро дуҫы булыуын хәтеренә төшөрәме халҡыбыҙ, әллә кәсеп өсөн дә килемлеме был шөғөл?*

***Рәсих ЙОРТБӘКОВ, Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылы, атта һыбай уҡ атыу буйынса "Башҡорт аты" халыҡ-ара 1-се фестиваль еңеүсеһе:*** Билдәле булыуынса, быйыл "Башҡорт аты" 2-се халыҡ-ара фестивале августа үтәсәк. Башҡортостан Башлығы тарафынан был мөһим сараға айырым иғтибар күрһәтелә. Былтырғы кеүек үк, унда Тыванан, Чечнянан, Дағстандан, Татарстандан, Ҡаҙағстандан, Әзербайжандан, Төркиә һәм Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренән йылҡысылыҡ буйынса белгестәр киләсәк. Әлеге ваҡытта беҙ ошо байрамға ныҡлап әҙерләнәбеҙ һәм был юлы ла һынатмаҫҡа иҫәп. Әҙерлек, тигәндән, беҙҙә ул даими алып барыла. Әле күптән түгел генә, май аҙаҡтарында, Иҫке Сибайҙа "Башҡорт аты" фестиваленә әҙерлек сиктәрендә ат спорты ярыштары булып үтте. Ул башҡорт тоҡом аттарын һаҡлау һәм үстереү буйынса үҙебеҙҙә булдырылған "Ирәндек" хәйриә фонды һәм район хакимиәте тарафынан ойошторолғайны. Бәйге сабыштарынан тыш, унда һыбайлы уҡсылар ярышы ла барҙы һәм беҙ призлы урынды ҡулдан ысҡындырманыҡ. Ә бына башҡорт маршруты төрөндә еңеүсе Учалы егете Рөстәм Теләүбирҙинға миндә тәрбиәләнгән тай бүләк ителде.

Был ярыштарҙан күренеүенсә, дөйөм һөҙөмтәләр былтырғыға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Шуныһы ҡыуаныслы: йәш уҡсылар хәҙер тәжрибәле өлкәндәрҙән бер ҙә ҡалышмай.Тимәк, һыбай уҡ атыу спортының киләсәге бар. Былтырғы фестивалдә лә был асыҡ күренде: уның майҙанында төрлө өлкәләр һәм республикаларҙан килгән 100 уҡсы көс һынашҡайны. Унда "йәйәүле" турнир ҙа, атта һыбай уҡ атыш төрҙәре лә бар. Һуңғыһы үҙе генә лә бер нисә төр - маршруттарға бүленә. Шулар араһында "башҡорт маршруты" буйынса былтыр еңеүсе булыу бәхете тейҙе. Фестивалдең мәҙәни-спорт программаһына индерелгән ат өҫтөндә "Ылаҡ", "Тай-тулаҡ" төрки халыҡтарының боронғо уйындары - фестивалдең йөҙөк ҡашы, тип әйтер инем. Был ярыштар унда ҡатнашыусыларҙан көс һәм ҡыйыулыҡ ҡына түгел, айырым бер таҫыллыҡ, ныҡышмаллыҡ та талап итә. Шул уҡ ваҡытта унда махсус әҙерлек үткән һәм һайлап алынған киң күкрәкле, 5-6 йәшлек аттар ғына ҡатнаштырыла.

Ошо спорт төрҙәре буйынса йәштәрҙе әҙерләүгә ҙур иғтибар бирәм. Физкультура уҡытыусыһы булараҡ, был минең өсөн бик ҡулай. Ә балаларҙа милли ат спорты төрҙәренә ҡыҙыҡһыныу ҙур, шуны һүрелдермәйенсә, ярыштарға йөрөтөп, призлар яулап, бер тигәс тә уларҙа илһөйәрлек тойғоларын нығытыуға күп ваҡытымды бүләм. Шул уҡ ваҡытта кәләшем Гөлсинә менән 2008 йылдан бирле ҡымыҙсылыҡ фермаһында шифалы эсемлек тә етештерәбеҙ. Ауыл балаһы өсөн ат - үҙе бер донъя, хазина. 5-6 йәшемдән ат өҫтөндә үҫтем, тиергә лә була. Атҡа һөйөү уятыусы Ғилметдин ҡартатайым булды. Йәй буйына бесән эшендә, күбә тарттырып үтә ине бала саҡ. Бындай тәрбиә файҙаға ғына булды, рәхмәтлемен ҡартатайыма. Үҫеп килгән быуындың ат менән бәйләнеше өҙөлмәһен ине. Ауылдарҙа ат аҫраусылар бар, әлбиттә, тик бына уға матди ҡыҙыҡһыныу маҡсатынан сығып ҡына ҡарарға кәрәкмәҫ ине. Балала тыуған йортона, ауылына, тәбиғәтенә һөйөү тәрбиәләүҙә, рухи байытыуҙа аттың әһәмиәте һөйләп бөткөһөҙ ҙур бит.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БАШ ҠАЛАМ*



# БЕҘҘЕҢ АРАЛА...

## рухи бәйләнеш бар

**Республикабыҙҙың баш ҡалаһы Өфө тураһында күп яҙырға була. Һәр милләттәштең, был ҡалала тыуып үҫкән һәм ҡасандыр йәшәп киткән барыһының да Өфө хаҡында әйтер һүҙе булыуына шикләнмәйем. Мин үҙем Өфөлә тыуып үҫтем, әлеге көндә лә баш ҡалала йәшәйем һәм унан ҡайҙалыр китергә теләгем юҡ. Өфө менән минең арала рухи бәйләнеш көслө, тип әйтһәм дә була, сөнки бер аҙнаға ситкә сыҡһам да уның киң урамдарын, иҫтәлекле урындарын һағынам.**

Беҙҙең ҡалала йәшәүселәрҙең алсаҡ сырайлы, ярҙамсыл булыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Тағы ла Өфөлә йәштәрҙең бик күп булыуы оҡшай. Йәшлек - ул матурлыҡ, хис, хыялдар донъяһы, ынтылыш, эҙләнеүҙәр осоро. Улар менән бергә ҡала ла матур тойғолар сорналышында йәшәй кеүек.

Һәр өфөләнең йәки баш ҡалаға килгән ҡунаҡтың баш ҡалала ятаҡан урыны барҙыр, моғайын. Мин үҙем Дуҫлыҡ монументы тирәһен, шул тирәләге Ағиҙел ярын һәм былтырғы көҙҙән алып "Өфө - Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы урынлашҡан ерҙе яратам. Айырыуса оҙаҡ йылдар эшләмәй торған ер аҫты үткәргесен эшләп ҡуйыуҙары шәп булды. Ә күптән түгел стеланы утлы бағана рәүешендәге дүрт иллюминация менән тулыландырыуҙары был урынға тағы ла күркәмлек өҫтәне. Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы исемен йөрөткән ике тиҫтәләгән ҡала араһында беҙҙең Өфө булыуы үҙе бер мәртәбә ул, ә уға булған ҙур иғтибар тик маҡтауға лайыҡ.

Был теманы ҡала музейҙары ла урап үтмәй. Өфө урамдары буйлап йөрөүсе 51-се "Башавтотранс" автобусында "Өфө - Хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" күргәҙмә проектын тормошҡа ашырыуы бик ҡыҙыҡлы уйланылған тема. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары фотоһүрәттәре ҡуйылған автобус тарихи сығанаҡ булыуы менән бер рәттән, пассажирҙарҙа музейҙарға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыусы сара.

Өфөлә парктар күп һәм улар барыһы ла өфөләрҙең ятатып ял иткән урыны. 12 июнь яңыртылған "Нефтехимиктар" паркы үҙ ҡапҡаларын асты. Ул шул тиклем үҙгәргән, матурайған, уңайлыҡтар тыуҙырылған. Балалар һәм спорт майҙансыҡтары, тренажерҙар бер ҡасан да буш булмаясаҡ, тип уйлайым. Шулай уҡ видеокамераларҙың булыуы парктың хәүефһеҙлегенә булышлыҡ итә. Паркка ингән урындағы арканы тергеҙеп ҡуйыуҙары айырыуса күңелгә ятты. Парк, ысын мәғәнәһендә, ыңғай яҡҡа үҙгәргән, шул уҡ ваҡытта үҙенең үҙенсәлеген һаҡлап ҡалған. Афарин!

Үткән ялдарҙа Өфөлә ҡала хакимиәте кубогына көрәш уҙҙы. Әгәр ҙә элегерәк көрәште тик һабантуйҙарҙа йәки махсус турнирҙарҙа ғына күрһәк, хәҙер баш ҡалабыҙҙың уртаһында ҡарай алыуыбыҙға шатмын. Балалар белеп үҫә, йәштәрҙең ҡыҙыҡһыныуы арта. Бындай турнирҙы Өфөнөң үҙендә уҙғарыуҙарын бик хуплап ҡаршыланым һәм артабан да был матур спорт төрөн ҡалала күрербеҙ, тип өмөт итәм.

**Ишдәүләт ҠАСИМОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда балалар өсөн "Горизонт" республика инклюзив ял лагерын асыу тантанаһы уҙҙы. "Бөтәбеҙ бергә!" тип аталған смена төрлө ҡала һәм райондарҙан, шулай уҡ коррекция мәктәптәренән аҡыл яғынан үҫешмәгән балаларҙы ҡабул итте. Ике аҙна дауамында балалар өсөн Ғафури районы буйлап экскурсиялар, уйындар, викториналар, спорт ярыштары, тематик концерттар, экологик дәрестәр, уйындар һәм ижади эштәр күргәҙмәләре ойошторола, тип хәбәр иттеләр Мәғариф министрлығынан.

✓Стәрлебаш районы спортсыһы Илдар Моратов Мәскәүҙә үткән билбау көрәше буйынса Донъя кубогында I урын яуланы. Республикаға идара итеү үҙәгенән муниципалитет башлығы Рөстәм Рахманғоловҡа һылтанып хәбәр итеүҙәренсә, ул 100 килограмм ауырлыҡ категорияһында иң көслөһө тип танылды. Бынан тыш, Илдар Моратов халыҡ-ара класлы спорт мастеры нормативын үтәне. Бынан алда "Башинформ" Башҡортостан спортсыһы Матвей Потаповтың пуля менән атыу буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында еңеү яулауын хәбәр иткәйне.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығының 2021 йылдың 23 мартындағы "Башҡортостан Республикаһында рөхсәт ителгән һунар төрҙәрен һәм һунар итеүҙе сикләүҙе раҫлау тураһында" бойороғона үҙгәрештәр индерелде. Яңы редакцияла ҡабанға һунар ваҡыты үҙгәртелде. Хәҙер уларға 1 июндән 28 (29) февралгә тиклем һунар итергә рөхсәт бирелде. Документтың элекке вариантында һунар 1 августан рөхсәт ителгәйне.

✓Рәсәйҙең Юстиция министрлығы Бөтә донъя ҡырағай тәбиғәт фондын* (WWF*, сит ил агенты тип танылған) маҡсатһыҙ ойошмалар исемлегенә индерҙе. Генпрокуратура баһаһы буйынса, WWF* фондының "тәбиғәтте һәм тирәяҡ мөхитте һаҡлау эшмәкәрлеген алып барған" вәкилдәре Рәсәйҙең власть органдары ҡарарҙарына йоғонто яһарға тырышҡан, "сәнәғәт һәм инфраструктура проекттарын тормошҡа ашырыуға ҡамасаулаған". Бынан һуң Генераль прокуратура фондтың Рәсәйҙәге эшмәкәрлеген файҙаһыҙ тип таныны.

✓Яҡташыбыҙ, Миловка ауылынан Иван Андреев Түбәнге Новгородта "Беҙ бергә. Спорт" паралимпиясыларҙың йәйге уйындарында коляскала теннис буйынса абсолют чемпион тип танылды. Иван Андреев яңғыҙ разрядта лидерлыҡты бирмәне, республикабыҙ спортсыһы Марат Йосопов менән парлы разрядта беренсе урынды алды. Ярышта йәмғеһе дүрт комплект миҙал уйнатылды.

✔ *Ислам банкингы эшмәкәрлекте Ислам нормаларына ярашлы алып барыуҙы күҙ уңында тота. Проценттар түләү, шулай уҡ уйын бизнесын, сусҡа ите, алкоголле продукция һәм тәмәке етештереүҙе финанслау тыйыла.*



*ҠЫҪҠАСА*

# ЯУГИР ЯЛ ИТҺЕН

**Башҡортостан Хөкүмәтендә махсус хәрби операцияла һәләк булғандарҙың туғандарына шифахана-курорт хеҙмәттәре күрһәтеү тураһында мәсьәлә ҡаралды.** Премьер-министр Андрей Назаров һөҙҙәренсә, былтыр махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға шифахана-курорт хеҙмәттәре күрһәтеү һәм финанслау тәртибе тураһында ҡарар раҫланғайны. Быйыл 156 хәрби шифахана-курорттарҙа дауаланған. Быйдай мөмкинлекте махсус хәрби операцияла һәләк булған яугирҙың ғаилә ағзаларына ла таратырға тәҡдим ителә, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте. Әлеге ваҡытта махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар 11 профилле учреждениела дауалана. Улар - "Асы", "Йәшел сауҡалыҡ", "Янғантау", "Ҡарағай", "Красноусол", "Танып", "Йоматау", "Яҡтыкүл" шифаханалары, "Ҡайынҡай" ял йорто, "Ҡайынҡай" профилакторийы һәм "Энергетик" дауалау-һауыҡтырыу үҙәге. Андрей Назаров ҡарар проектын хупланы һәм Дәүләт идаралығының һаулы үҫеш министрлығына 1 сентябргә тиклем мөрәжәғәттәрҙе ҡуҙәтеп барырға мөмкинлек биргән сервис әҙерләргә ҡушты.

✔ **Республикала "Айғыр" пилотһыҙ осоу аппараттарына ҡаршы көрәш буйынса айырым подразделение булдырырға хәл ителде.** Ул "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкы составында була. "Башҡорт батальоны" телеграм-каналында хәбәр ителеүенсә, республикала СВО-ла ҡатнашыу өсөн 2,5 мең кешенән торған полк төҙөргә ҡарар ителде. Июндә Өфөнән Сергей Зорин исемендәге башҡорт танк батальоны һәм Шәриф Сөләймәнов исемендәге зенит-артиллерия батареяһы, Алексей Сухоруков исемендәге артиллерия батареяһы яугирҙары, Әхмәт Дәүләтов исемендәге башҡорт медицина ротаһы, совет партизаны һәм данлыҡлы разведчик Даян Мурзин, Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимов исемендәге ирекле батальондар, Мөгин Нагаев исемендәге артдивизион хәрби әҙерлек урынына юлланды. Уларҙың барыһы ла "Башҡортостан" ирекле мотоуҡсылар полкы составына инде.

✔ **Рәсәй Хөкүмәте "Ауыл ипотекаһы" программаһының мөмкинлектәрен киңәйтте.** Хәҙер программала ҡатнашҡан төбәктәрҙә йәшәүселәр өсөн йылына 3 процент менән кредиттың максималь күләме 3 миллиондан 6 миллион һумға тиклем арттырылды. Был граждандарға терәк тораҡ пункттарҙағы күп ҡатлы йорттан фатир һатып алыу өсөн кредит алырға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ ауыл халҡы әҙер йорт комплекттарын файҙаланып, үҙ көсө менән өй һалырға льготалы ипотека алыу мөмкинлегенә эйә була. "Әлеге ҡарар ауыл ерендә йәшәүселәргә тиҙерәк йортло йәки фатирлы булырға, ошо биләмәләргә тағы ла күберәк белгестәр ҡайтарырға булышлыҡ итер", - тип билдәләне Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин. Хәбәр ителеүенсә, 2022 йылда Президент ҡушыуы буйынса Хөкүмәт программаны мөҙҙәтһеҙ итте. 2023 йылда программаны ғәмәлгә ашырыуға федераль бюджетта 19,5 миллиард һумдан ашыу аҡса ҡаралған.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# МӘҒЛҮМӘТ САРАЛАРЫНДА...

**"Медиалогия" 2023 йылдың июнь йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округы губернаторҙары медиарейтингын әҙерләне. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров киң мәғлүмәт сараларында телгә алыу йәһәтенән беренсе урынды алды.**

Билдәле булыуынса, киң мәғлүмәт сараларында республика етәксеһе хаҡында 12,5 мең тапҡырҙан күберәк яңылыҡ баҫылған. Медиаиндекс 99 086,2 тәшкил иткән. "Башҡортостан Башлығы пленар ултырышта сығыш яһаны, шулай уҡ 26-28 июндә Өфөлә уҙған Рәсәй һәм Беларусь төбәктәренең X форумы йомғаҡтары тураһында һөйләне. Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумында Рәсәйҙең Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко һәм Радий Хәбиров "Хәтер поезы" патриотик проектында ҡатнашыусылар менән осрашты. Валентина Матвиенко республика етәксеһенә форумға ҙур әҙерлек эше өсөн рәхмәт белдерҙе. Киң мәғлүмәт саралары шулай уҡ Башҡортостан Башлығының Һамар өлкәһенә, "Башҡортостан" ирекле полкы яугирҙарының хәрби әҙерлек урынына барып ҡайтыуын яҙып сыҡты. Бынан тыш, 16 июндә Башҡортостандың күргәҙмә стендында Радий Хәбиров журналистар менән әңгәмәлә республика делегацияһының XXVI Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы майҙансығындағы эшенә йомғаҡ яһаны", - тиелә отчетта.

# ӨСӨНСӨ УРЫНДА...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге республика делегацияһы "Иннопром-2023" халыҡ-ара сәнәғәт күргәҙмәһе эшендә ҡатнашты.**

"Иннопром" майҙансығындағы төп ваҡиғаларҙың береһе - 2022 йыл өсөн Рәсәй төбәктәрендә сәнәғәт сәйәсәтенең һөҙөмтәлелек рейтингы менән таныштырыу. Башҡортостан 2022 йыл йомғаҡтары буйынса, Мәскәүҙән һәм Мәскәү өлкәһенән ҡала, өсөнсө урынды алды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021 йылда Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы тәүге тапҡыр сәнәғәт өлкәһендә ил субъекттарының башҡарма власть органдары эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре буйынса төбәктәрҙең һөҙөмтәлелек рейтингын төҙөнө. Беҙҙең республика ике йыл рәттән ошо рейтингты етәкләне. Башҡортостан - автомобиль бензины, аҙыҡ-түлек һәм кальцийлы сода, табаҡлы быяла, автомобиль тағылмалары һәм продукцияның башҡа төрҙәрен етештереү буйынса Рәсәй төбәктәре араһында беренсе урында.

# БӘЙЛӘНЕШТӘ...

**Башҡортостандың Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығы һәм Свердловск өлкәһенең сәнәғәт һәм фән министрлығы дәүләт сәнәғәт сәйәсәте өлкәһендә төбәк-ара бәйләнештәрҙе үҫтереү тураһында һөйләшеп килеште. Екатеринбургта "Иннопром-2023" халыҡ-ара күргәҙмәһендә ошо хаҡта килешеү төҙөлдө.**

"Республика Рәсәй төбәктәре менән тығыҙ бәйләнештә: күп предприятиелар берләшеп эшләй, хатта бер үк кластерҙарҙа ҡатнаша. Һамар өлкәһендә "АвтоВАЗ"да Башҡортостандың тиҫтәләгән предприятиеһы эшләй. Силәбе өлкәһе менән беҙҙе металлургия һәм тау сәнәғәте бәйләй. Татарстан - автомобилдәр эшләүҙә күптәнге партнер. Алыҫ Себер һәм Башҡортостан нефть һәм газ сығарыу өлкәһендә күп йыллыҡ партнер бәйләнештәре бар. Донецк Халыҡ Республикаһы менән станоктар эшләү һәм еңел сәнәғәт өлкәһендә хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Хәҙерге ваҡытта мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеү бик мөһим", - тип билдәләне республиканың сәнәғәт һәм энергетика министры Александр Шельдяев. Документ уртаҡ инвестиция һәм инновация проекттарын булдырыуҙы, инвестициялар йәлеп итеү һәм дәүләт ярҙамы сараларын күрһәтеү мәсьәләләрендә тәжрибә уртаҡлашыуҙы күҙ уңында тота. Төбәктәр сәнәғәт производствоһын диверсификациялау өлкәһендә хеҙмәттәшлек итергә ниәтләй.

# НУҒАЙ СИСЕЛЕШЕ

**Нуғай сиселеше буйынса транспорт хәрәкәте 1 сентябргә асыласаҡ. Был хаҡта Өфө хакимиәте башлығы оператив кәңәшмәлә хәбәр итте.**

Бөгөн Нуғай Өфөнөң йылдам үҫешеүсе һәм тиҙ төҙөлөүсе микрорайоны. Уның торлаҡ фондында 6 меңләп шәхси йорт иҫәпләнә. Яҡын араларҙа был һандың ике тапҡырға артыуы көтөлә. Көн һайын меңәрләгән автомобиль тимер юл киҫелеше тығынында тора, был урында юл-транспорт ваҡиғалары ла йыш була. Ошо мәсьәләне хәл итеү буйынса "Хәүефһеҙ сифатлы юлдар" милли проектын бойомға ашырыу сиктәрендә бында транспорт сиселеше төҙөлөшө бара һәм хәҙер 1850 метр оҙонлоҡтағы төп юлдың ер полотноһын күтәртеү эштәре тамамланып килә. Юл ике йүнәлештәге дүрт хәрәкәт һыҙатынан торасаҡ. Ул "М5-Урал" трассаһы киҫелешендәге сиселештән башланып, Нуғайға инген ерҙә мәсет янында тамамлана. 598 мең куб.м ҡом-таш түшәлде лә инде - был дөйөм күләмдең 97 проценты. Ямғыр һыуын ағыҙыусы канализация төҙөлдө. Эшселәр хәҙер граниттан 5 километрлыҡ юл тирәсен һала, шулай уҡ асфальтбетон аҫтында ҡала торған аҫҡы ҡатламды түшәй. Тимер юл өҫтөнән юл үткәргестең оҙонлоғо - 106, киңлеге 25 метр; ул да, төп юл кеүек үк, дүрт хәрәкәт һыҙатынан тора. Объектта көн һайын 40 эшсе, 45 үҙ бушатҡыс, 12 берәмек йөк күтәреүсе һәм юл-төҙөлөш техникаһы эшләй. Транспорт сиселеше буйлап автомобиль хәрәкәтен асыу 1 сентябргә тип күҙалланһа, бындағы эштәр тулы күләмдә ошо йылдың ноябрь аҙаҡтарына тамамланасаҡ.

# РИБАҺЫҘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Ведомости" баҫмаһына биргән интервьюһында республикаға Ислам донъяһы илдәренән сит ил инвестицияларын йәлеп итеүҙе килеп тыуған иҡтисади шарттарҙа айырыуса көнүҙәк тип атаны.**

"Башҡортостан банк хеҙмәтләндереүенә Ислам принциптарын индереү дүрт пилот төбәгенең береһе булып тора. Партнерлыҡ финанслауын индереү буйынса эксперимент ике йыл бара, дингә ҡарамай, бөтәһе лә алырға мөмкин. Был финанслауҙы фонд, автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошма һәм башҡа формаларҙа теркәлгән финанс ойошмалары, юридик шәхестәр бирә, ә эшмәкәрлеген Үҙәк банк көйләй. Был ысулдың нисек эшләүен өйрәнеп, артабан хоҡуҡи көйләү алымдарын билдәләү мөмкинлеген тикшерергә иҫәп тотабыҙ", - тине Радий Хәбиров. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, Ислам банкингы эшмәкәрлекте Ислам нормаларына ярашлы алып барыуҙы күҙ уңында тота. Проценттар түләү (риба) һәм унан процент килешеүҙәре, билдәнһеҙлек шарттары менән килешеүҙәр, шулай уҡ иҡтисадтың ҡайны бер секторҙарын: уйын бизнесын, сусҡа ите, алкоголле продукция һәм тәмәке етештереүҙе финанслау тыйыла. Банктар инвестицияларҙан табыш ала.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔"Медиалогия" компанияһы 2023 йылдың июне өсөн Волга буйы федераль округы субъекттарының баш ҡалалары етәкселәре медиарейтингын әҙерләне. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев рейтингта бишенсе урында килә, бер айҙа ул 2 позицияға күтәрелде. Ә Өфө ҡала советы рәйесе Марат Вәсимов рейтингта бер баҫҡысты юғалтты, хәҙер ул 26-сы урында тора. Медиарейтинг лидеры - Түбәнге Новгород башлығы Юрий Шалабаев. Һуңғы, 28-се урында Саранск депутаттары советы рәйесе Татьяна Шукшина.

✔Өфөнөң Дан бульварында яңы артобъект барлыҡҡа килде. Баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, унда ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев осҡан самолет-штурмовиктың макеты ҡуйылған. "Башинформ" яҙғанса, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Муса Гәрәев 250-нән ашыу хәрби осош яһаған, шул уҡ ваҡытта бер тапҡыр ҙа яраланмаған. 1945 йылдың майында ул тарихта тәүгеләрҙән булып Советтар Союзы Геройының бер юлы ике алтын йондоҙон алған.

✔Башҡортостанда йәшәүселәр өсөн Ҡаҙағстан ҡалаларына тура рейстар асыла. Red Wings авиакомпанияһы 11 июлдән Sukhoi Superjet 100 самолетында Өфө - Астана маршруты буйынса тура рейстарҙы тергеҙә. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, осоштар шишәмбе көндәрендә башҡарыла. Юлға сәғәт ярым ваҡыт кәрәк. Авиакомпания Өфөнән Алматыға рейстарҙы аҙнаһына ике тапҡырға тиклем арттырырға планлаштыра.

✔14 июлдән Өфөнән Соль-Илецк курортына автобустар йөрөй башланы, тип хәбәр иттеләр "Башинформ" агентлығына "Башавтотранс"тың матбуғат хеҙмәтенән. Рейстар көн аша төнгө сәғәт 11-ҙә Өфөнөң Көньяҡ автовокзалынан ҡуҙғала. Бынан алдараҡ республикала ҡала яңы автобустары графигының үҙгәреүе билдәле булды.

✔"Өфө" футбол клубының элекке генераль директоры Махачкаланың "Динамо" футбол клубын етәкләй. Был хаҡта клуб президенты Гаджи Гаджиев хәбәр итә. 5 июлдә Ғәзизов менән килешеү төҙөнөк, тип белдерҙе ул. Килешеү мөҙҙәтһеҙ. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, Шамил Ғәзизов июнь башында "Өфө" футбол клубы етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы. Ул Беренсе лиганың 34-се туры матчынан һуң эштән китеү тураһында ғариза яҙҙы (беҙҙең команда "Кубан" клубын ҡабул иткәйне).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *"Беҙҙең министрлыҡ һәр районға һәм ҡалаға хеҙмәткәрҙәр тәғәйенләргә булды, улар граждандар менән осрашыу һәм телефон мутлашыусылары ҡапҡанына эләкмәһен өсөн аңлатыу эше алып бара башлаясаҡ".*

ШУНДАЙ ҠАНУНДАР

# ЙЫЛ ЯРТЫҺЫ ҮТЕП КИТТЕ...

**Июль ул йәй уртаһы ғына түгел, йылдың яртылығы ла. Беҙҙә, ғәҙәттә, ярты йыллыҡ эштәргә йомғаҡ яһала, фекер төйнәлә һәм киләһе ярты йылға бурыстар билдәләнә, шул уҡ ваҡытта яңы шарттарға ярашлы яңы ҡарарҙар, закондар сығарыла. Был тупланмала уҡыусыбыҙ иғтибарына пенсия, пособие, һалым түләүҙәре кеүек ҡайһы бер өлкәләрҙәге яңылыҡтар хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт еткерелә.**



## Индексация

Рәсәй Хеҙмәт министрлығы эшләмәүсе пенсионерҙарҙың страховкалы пенсияһын индексациялау сиктәрен билдәләне. Киләсәккә планда ҡаралыуынса, 2024 йылдың 1 ғинуарынан пенсияларҙың 5,3 процентҡа арттырылыуы ихтимал. Шуның һөҙөмтәһендә страховкалы пенсияның уртаса йыллыҡ күләме 22 772 һум буласаҡ тип күҙаллана. 2025-2026 йылдарҙа ике тапҡыр индексация көтөлә: 1 февралдән - 4 процентҡа, 1 апрелдән - 3,8 һәм унан һуңғы йылда 2.8 процент. Һөҙөмтәлә йыллыҡ пенсия күләме 25 690 һум тәшкил итәсәк. Бынан тыш, Хеҙмәт министрлығы страховкалы пенсияға тотороҡло түләү күләмен дә арттырырға иҫәп тота. Киләһе йылдың 1 ғинуарынан ул 7 968 һумға тиклем еткерелһә, шул йылдың 1 февраленән - 8 287 һумғаса, 1 апрелдән 8 602 һумға еткереләсәк. 2025 йылда ике тапҡыр индексацияланғандан һуң страховкалы пенсияға тотороҡло түләү хаҡы 9 196 һум тәшкил итәсәк.

## 80 йәш тулғас...

Пенсионерға 80 йәш тулғандан һуң уның ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсия күләме ике тапҡырға арттырылып, 7567 һумдан 15134 һумға еткереләсәк. Бындай пенсияға шулай ҙа 80 йәше тулған бөтә өлкән йәштәгеләр ҙә дәғүә итә алмай, ә ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсия алыусылар ғына хоҡуҡлы.

## Эшләүселәр хаҡында

Закон буйынса эшләп йөрөүсе пенсионерҙар страховкалы һәм уға тотороҡло түләүле пенсия ала һәм уларҙың пенсияһы, белеүебеҙсә, индексацияланмай. Шулай итеп, эшләп йөрөүсе һәм эшләмәүсе өлкән йәштәгеләрҙең пенсияһындағы айырма 5 меңгә барып етте һәм ул һәр бер яңы индексация һайын арта бара. Яҡындағы өс йыл эсендә хөкүмәт эшләүсе пенсионерҙарҙың пенсияһын арттырырға йыйынмай. Был мәсьәлә Дәүләт Думаһында бер генә тапҡыр ҡаралманы, ләкин "Бының бөгөнгө наҡыҫлыҡ осоронда федераль бюджетҡа ҙур сығымдар килтерәсәгенә һылтанып, ғәҙеллеккә юл ябылып килә, - тине был хаҡта Дәүләт Думаһының Хеҙмәт, социаль сәйәсәт һәм ветерандар эштәре буйынса комитет ағзаһы Светлана Бессараб - Ә бит етештереү өлкәһенә йыш ҡына бай тәжрибәгә эйә өлкән йәштәге кешеләр талап ителә, әммә индексацияның булмауы уларҙы эшкә дәртләндермәй. Һөҙөмтәлә эшләргә теләүсе пенсионерҙар һаны кәмей бара..."

## Һалым хәбәре

Июлдән башлап физик шәхестәр һалым органдарынан хәбәрҙе Дәүләт хеҙмәттәре аша ала башлаясаҡ. Элек бындай хәбәрҙәр почта аша заказлы хат йәки Федераль һалым хеҙмәте сайтындағы шәхси кабинетта электрон рәүештә алына ине. Һалым хәбәрен алыу өсөн порталда быны раҫлаусы яҙмаң булырға тейеш. Икенсе төр юл менән хәбәр алырға теләүселәр шулай уҡ был хаҡта порталға яҙырға тейеш.

## "Мир" картаһына

Ошо айҙан башлап эшендәге фажиғәнән зыян күргән йәки һөнәри сир менән яфаланған кешеләргә социаль түләүҙәр фәҡәт ватан түләү системаһындағы "Мир" картаһына һалына башлаясаҡ. Кемдең һаман да ундай картаһы юҡ, уны илдең теләгән бер банкында эшләтеп алырға мөмкин. Яңы картаны ҡулығыҙға алыу менән уның реквизиттарын Рәсәй Социаль фондының төбәк бүлексәһенә хәбәр итегеҙ.

## Юл фажиғәләре

15 июлдән юл-транспорт ваҡиғаларын, килтерелгән зыянды ҡаплау хаҡындағы ғаризаны тултырып, Дәүләт хеҙмәтендәге шәхси кабинет аша теркәтергә була. Бының уңайлығы шунда: шәхси кабинетта транспорт сараһы һәм уның хужаһы тураһында мәғлүмәт бар, шунлыҡтан ОСАГО буйынса тулы документтар йыйылмаһын туплауы еңелгә тура киләсәк. Шәхси кабинетҡа автомобилде ремонтҡа ебәреү, страховка түләүенең суммаһы хаҡында килешеү буйынса ла мәғлүмәт килә. Нидәйҙер документ етмәгән осраҡта ла автомобиль хужаһы электрон хәбәр аласаҡ. Ғаризаны ҡарау страховкалаусы компанияға бөтөн мәғлүмәттәр килеп еткәс тә башлана һәм машинаны ҡарау ваҡыты һәм урыны хаҡында килешелә. Был хаҡтағы хәбәрҙе лә Дәүләт хеҙмәтендәге шәхси кабинеттан алырға була.

## Шулай уҡ:

- 1 июлдән, әгәр әсә ваҡытынан алда эшкә сыҡһа, йәш ярымлыҡ бала ҡарау буйынса уның пособиеһы һаҡланасаҡ.
- 1 июлдән торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү буйынса компенсацияны теркәү тәртибендә ил буйынса берҙәм көн булдырыла. Компенсация алыу өсөн тейешле формалағы ғаризаны тултырып бирергә кәрәк. Мотлаҡ шарт - торлаҡ-коммуналь түләүҙәрҙә бурысың булмауы. Ғаризаны шәхсән йә булмаһа, Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша бирергә мөмкин, ул 10 эш көнө эсендә ҡараласаҡ.
- 1 июлдән Рәсәйҙә составында шәкәр булған алкоголһеҙ эсемлектәргә литрына 7 һумдан акциз индерелә.
- 15 июлдән ОСАГО буйынса страховка түләүҙәре ике яҡтың да ризалығы булған хәлдә зыян күргән милектең фотоһүрәте йә видеояҙмаға ҡарап билдәләнәсәк.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# АЛДАҠТЫ ТАНЫЙ БЕЛ!

**Һуңғы йыл эсендә Башҡортостан халҡы интернет-мутлашыусыларға үҙ теләге менән 1 миллиард 613 миллион һум аҡса биргән. Был хаҡта Башҡортостан Республикаһы Эске эштәр министрлығының йәмәғәт советы ултырышында хоҡуҡ һаҡлау ведомствоһы етәксеһе Александр Прядко белдерҙе.**

Ултырыш онлайн-мутлашыуҙы иҫкәртеүгә арналды. Эске эштәр министры әйтеүенсә, көн һайын отчеттарҙа кешеләрҙе телефон аша һәм интернет аша алдау теркәлә. Ҡайһы берҙә бер тәүлектә урланған аҡса 20-30 миллион һумға барып етә. Мутлашыусыларға биреү өсөн хатта кредит алалар. Александр Прядко фекеренсә, кибер-һөжүм итеүселәргә ҡаршы бөтә йәмғиәт менән көрәшергә, аңлатыу эше алып барырға кәрәк: "Енәйәтселәр хәүефһеҙ иҫәпкә аҡса күсерергә тәҡдим итә, үҙҙәрен Эске эштәр министрлығы һәм ФСБ хеҙмәткәрҙәре итеп таныштыра, Африка алмаздарына аҡса һалырға тәҡдим итә йәки енәйәт эше ҡуҙғатыу менән ҡурҡыта. Мутлашыусыларға ҡаршы полицияның ғына көрәшеүе аҙ. Улар бик йылғыр, техник һәм юридик яҡтан әҙерләнгән әхлаҡи принципһыҙ кешеләр. Енәйәтселәр элемтә өлкәһендә заманса технологияларҙы һәм ҡануниәттәге етешһеҙлектәрҙе ҡуллана. Күрәһең, мутлашыусыларҙың күбеһе социаль инженерия алымдарын, ҡорбанын буйһондора белә".

БР буйынса Эске эштәр министрлығы ҡарамағындағы Йәмәғәт советы рәйесе Рафаил Диваев 60 процент осраҡта мутлашыусылар зыян күреүсегә психологик йоғонто яһау ысулдарын ҡулланыуы, ҡурҡытыуы, алдауы, махсус хеҙмәттәр һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре булып сығыш яһауы менән килешә. Ведомствола бындай енәйәттәргә ҡаршы көрәш буйынса махсус подразделение булдырылған, уның һөҙөмтәле эше арҡаһында ыңғай үҫеш күҙәтелә, енәйәтселәр тотола, енәйәт эштәре ҡуҙғатыла. Эске эштәр министры урынбаҫары Евгений Полтавец фекеренсә, был эшкә предприятиелар, ойошмалар һәм учреждениелар етәкселәре йәлеп ителергә тейеш. Улар үҙ хеҙмәткәрҙәренә енәйәттәр тураһында хәбәр итергә һәм уларҙың именлеге тураһында хәстәрлек күрергә тейеш. "Беҙҙең министрлыҡ һәр районға һәм ҡалаға хеҙмәткәрҙәр тәғәйенләргә булды, улар бөтәһе лә предприятиелар һәм ойошмалар коллективтары, граждандар менән осрашыу һәм телефон мутлашыусылары ҡапҡанына эләкмәһен өсөн аңлатыу эше алып бара башлаясаҡ".

Өфө фән һәм технологиялар университетының дөйөм психология кафедраһы мөдире, психология фәндәре кандидаты, доцент Владимир Линевич мутлашыусыларҙың ҡорбандарына нисек психологик йоғонто яһауы тураһында һөйләне. Һөжүм итеүселәргә буйһоноуҙың төп факторы - мутлашыусыларҙың һөйләшеү барышында әңгәмәселәрҙең көсһөҙ нөктәһен табыуы. Владимир Линевич билдәләүенсә, мутлашыусыларҙың күбеһе психология өлкәһендә айырым белемгә эйә түгел, улар әҙерләгән схема буйынса ғына әңгәмә үткәрә.

БР Эске эштәр министрлығының йәмәғәт советы ағзалары БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Дәүләт Думаһына граждандың шәхес таныҡлығынан тыш интернет селтәрендә микрозаймдар, кредиттар алыу мөмкинлеген тыйған закон проектын тәҡдим итергә йыйына.

Шулай уҡ кибер-енәйәтселекте иҫкәртеү, асыу һәм тикшереү буйынса фәнни-методик тәҡдимдәр әҙерләү бурысы менән Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институты һәм Өфө фән һәм технологиялар университеты ғалимдарына, белгестәренә, факультетына мөрәжәғәт итеү кәрәклеге тураһында әйтелде.

**Алик ШАКИРОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Табан ярылғанда

❖ 2 ҡалаҡ ваҡланған кесерткән япрағына 1 литр һыу ҡойоп, төнәтергә. Аяҡтарҙы шул һыуға 10-15 минут тығып ултырырға. Аҙағынан аяҡтарҙы ҡоротоп һөртөп, туҡлыҡлы крем йәки май һөртөп, еңелсә массаж яһарға.

## Пародонтит

❖ 1-әр өлөш йүкә һәм календула сәскәһен ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15-20 минут төнәтергә. Көнөнә 2 тапҡыр ауыҙҙы сыйҡатырға.

## Сәс ҡойолһа

❖ 6 ҡалаҡ ҡайын япрағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә. Сәсте шуның менән сайҡатырға.

❖ 4-5 ҡалаҡ йүкә сәскәһенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм сәсте сайҡатырға.

❖ Календула сәскәһенә 1:10 нисбәтендә араҡы ҡойорға һәм төнәтергә. Шуның 1 ҡалағын ярты стакан ҡайнатылған һыуға ҡушырға һәм сәсте сайҡатырға.

❖ Сәс ныҡ ҡойолғанда меңъяпраҡ үләненең яңы һығылған һутын 2 аҙна дауамында көнөнә 2 тапҡыр баш тиреһенә ыуырға.

## Көнбағыш

❖ Бөйөрҙә таш табылғанда 3-4 көнбағыш тамырын онтаҡларға. 1 стаканына 3 литр һыу ҡойоп, ҡайнап сыҡҡандан һуң 3 минут утта тоторға. Һөҙөргә, әммә тамырҙы ташламаҫҡа. Ҡайнатманы 3 тәүлек эсендә эсеп бөтөргә (көнөнә 1 литр). Ошо уҡ тамырҙарҙы тағы 3 литр һыуҙа ҡайнатырға, әммә был юлы 15 минут дауамында. Шунан һөҙөргә һәм тамырҙы ташларға. Ҡайнатманы 3 тәүлектә эсеп бөтөргә. Бөйөрҙәге таштар бәүел менән сыға. Кәрәк булғанда дауаланыуҙы ҡабатларға була. Был ысул менән организмға ултырған тоҙҙо ла сығаралар, әммә ул 2-3 аҙна дауаланғас ҡына сыға башлай. Бәүел һыу кеүек таҙарғансы эсергә. Был ваҡытта әсе, тоҙло, әсегән ризыҡ менән туҡланырға ярамай.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Хөкүмәтебеҙ ҡанундарын ғәмәлгә ашырып, шулар менән эш итеүселәр, әлбиттә, закондың һәр статьяһын тик ғәҙеллек, кеше мәнфәғәтен ҡайғыртыуға ғына йүнәлтеү яғын ҡарарға тейеш тип һанайым.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



## БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

**Яға.** Ишмәкәй ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 38 см, өҫкө киңлеге 26 см, аҫҡы киңлеге 36 см.



**Яға.** Рысай ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 41 см, өҫкө киңлеге 23 см, аҫҡы киңлеге 30 см.



**Яға.** Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылында һаҡлана. Оҙонлоғо 42 см, өҫкө киңлеге 28 см, аҫҡы киңлеге 38 см.



**Яға.** Миндәк ауылы музейында һаҡлана. Оҙонлоғо 43 см, өҫкө киңлеге 27 см, аҫҡы киңлеге 35 см.



**Азат ҒАРИПОВ, этнограф. "Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан. Аҙағы. Башы 2022 йылдың 46-сы һанында.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# ҺУҠЫР ЗАКОНДАР ҘА БУЛА...



**Күҙҙәре бәйләнгән, бер ҡулына бизмән, икенсеһенә ҡылыс тотҡан ҡатын-ҡыҙ статуяһын кемдең күргәне юҡ? Суд органдарының ғәҙел хөкөм символы итеп яһағандар уны. Боронғо грек мифологияһына таянып төшөрөлгән ана шул һүрәтте күрһәм, һәр саҡ бынан күп йылдар элек ҡараған бер һинд фильмын хәтерләйем.**

"Слепой закон" тип атала ине ул. Күҙ йәшһеҙ ҡарау мөмкин булмаған был фильмда бер ҡыҙ бала үҫтергән йәш ғаиләнең тормошо һүрәтләнә. Ҡатыны ғәйәт һылыу булған шул ғаилә башлығына көнсөлләгә килеп, үс тотоп йөрөгән бер яуыз әҙәм һәр саҡ уға ниндәйҙер этлек ҡылырға тырыша, хатта берәй законлы юл менән уны төрмәгә лә ултыртмаҡ була. Бер мәл был кеше һис кемдең башына килмәҫтәй мәкерле план ҡора. Баҫыуҙа эшләп йөрөгән ғәйепһеҙ бер крәҫтиәнде тотоп үлтерә лә, уның йөҙөн таш менән иҙеләп, танымаҫлыҡ хәлгә килтерә. Кеҫәһендә документтары ятҡан үҙенең кейемдәрен һалып, шул мәйеткә кейҙерә, ғөмүмән, үҙен үлгән итеп күрһәтә. "Үҙен үлтереүҙә" әлеге йәш кешене ғәйепләнәндәр өсөн ваҡиғаны йәнәһе лә "күреп торған" ялған шаһиттар яллай һәм икенсе бер ҡалаға ҡаса. Исемен, йөҙөн үҙгәртеп, һаҡал-мыйыҡ үҫтереп, "рухани" кеше булып китә. Полиция һис бер ғәйебе булмаған әлеге йәш ирҙе ҡулға ала. Шаһиттарҙың күрһәтмәһенә судья ла ышана, "үлтереүсе" тип ғәйепләнеп, ир ун йылға төрмәгә ябыла. Был кеше төрмәлә саҡта уның бағыусыһыҙ ҡалған ҡәҙерле ҡатыны, ҡыҙы үлә...

Хөкөм яҙаһын тулыһынса алып, ир, ахырҙа, иреккә сыға. Ғаиләһе өсөн ныҡ ҡайғыра. Күпмелер ваҡыттан яҡындарының үлеменә сәбәпсе булған, үҙен нахаҡҡа хөкөм иттергән әлеге "руханиҙы" танып ҡала һәм уға ташлана. Ә теге бәндә, ҡурҡыныс янағанын күреп, ҡаса башлай һәм суд залына барып инә. Унда сираттағы суд ултырышы бара. Яуыз әҙәм ярҙам һорап, судьяның аяҡ аҫтына йығыла. Әммә шул мәл ҡыуып еткән үс алыусы уны аямай, залдағы бөтә кеше алдында сәнсеп үлтерә. "Судья әфәнде, иҫләйһеңме, ҡасандыр ошо кешене "үлтергәнем" өсөн һин мине хөкөм иткәйнең, - ти ул закон вәкиленә. - Мин ун йыл төрмәлә ултырып сыҡтым. Шул арҡала иң ҡәҙерле кешеләремде юғалттым. Ә бына бөгөн был әҙәм аҡтығын мин ысынлап та дөмөктөрҙөм. Мине тағы ла төрмәгә ябырға ҡулың барырмы? "Әллә ҡасан үлгән кешене икенсе тапҡыр үлтергән өсөн..." тигән закон бармы һеҙҙә? Һәм шул законығыҙ минең ҡатынымды, ҡыҙымды ҡабаттан терелтә аламы?.."

Фильм нисек тамамланды, тип уйлайһығыҙ? Был кешене тағы ла хөкөм итәләр. Эйе, "кеше үлтергән" өсөн. Ошо хаҡта бер закон белгесенә: "Әгәр ҙә тормошта шундай хәл ысынлап та була ҡалһа, кешене икенсе мәртәбә хөкөм итеүҙәре мөмкинме?" - тигән һорау биҙем. "Эйе, - тине белгес, - суд ҡарары, ғәҙәттә, аныҡ үлтереү осрағы буйынса сығарыла. Ә "самосуд" бер ерҙә лә рөхсәт ителмәгән. Әлеге егет законға мөрәжәғәт итергә тейеш булған..."

...Икенсе бер ваҡиға мин хеҙмәт итеп йөрөгән осорҙа булды. Был хәл хоҡуҡ һаҡлау органдарының эшенә әллә ни ҡағылмай, ә уларға урынһыҙға мөрәжәғәт итергә яратыусы бәғзе бер кешеләр хаҡында. Гарнизонға юғарынан финанстар хеҙмәтен тикшереүсе сираттағы комиссия килеп төшә. Майор званиеһындағы беҙҙең часть финансисы был кешеләрҙе "ризалаштырыр" өсөн уларҙы мөмкин тиклем йылы ҡаршыларға тырыша. Тикшереүселәрҙе хөрмәт итә торған шундай йоланың бөтә ерҙә лә булыуын барыбыҙ ҙа беләбеҙ бит инде. Ревизорҙарға өлкәләге районҙарҙың береһендәге тарихи ҡомартҡыны (Силәбе өлкәһендәге "Арҡайым"ды) күрһәтергә була был. Ул саҡ шәхси автомобиль һирәктәрҙә генә бар ине, әммә комиссия ағзаларын ултыртып йөрөтөргә транспорт бик кәрәк булып киткәс, әлеге майор "Жигули"һы булған бер прапорщикка мөрәжәғәт итә. Автомобиль хужаһы уларҙы күрше районға алып барырға риза була. Комиссия ағзаларының күңелен күреп, уларҙы һыйлап, ҡабаттан хәрби ҡаласыҡҡа алып ҡайтып килгән мәлдә ҡараңғыла юл трассаһына килеп сыҡҡан бер йылҡы малына төкөйҙәр. Машина бөтөнләйгә тиерлек емерелә. Бәхеткә, уның хужаһы, ревизорҙар барыһы ла иҫән ҡала. Тик беҙҙең майорыбыҙ, баш мейеһе һелкенеп, госпиталгә эләгә (хәрби табип булараҡ, уны дауалауҙа мин дә ҡатнашҡайным). Оҙаҡ ҡына дауаланып сыҡҡас, һаулығына килтергән зыян өсөн матди компенсация (күпмелер аҡса) юллап, был офицер үҙенең йомошон үтәүсе әлеге водителде судҡа бирергә була. Судтың ниндәй ҡарар сығарғанын белмәйем. Һәр хәлдә, өлкән офицерҙың һүҙен тыңлаған, шул арҡала үҙенең шәхси автомобилен емерттергән меҫкен прапорщикты йәлләнем. Моғайын, уны суд яҡлағандыр, тип кенә өмөт иттем. Ә аҡсанан башҡа нәмәне танымаған, үҙенә нисек матди яҡтан файҙа эшләүҙе генә ҡайғырта белгән әлеге финансист майорҙың "тапҡырлығына" ошо көнгәсә аптырайым...

Хөкүмәтебеҙ ҡанундарын ғәмәлгә ашырып, шулар менән эш итеүселәр, әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә саф йөрәкле, таҙа намыҫлы булырға, закондың һәр статьяһын тик ғәҙеллек, кеше мәнфәғәтен ҡайғыртыуға ғына йүнәлтеү яғын ҡарарға тейеш тип һанайым. Әҙәм балаларының һәр төрлө шундай проблемаларын хәл иткәндә аныҡ вазифа биләгән хеҙмәткәрҙәрҙең фәҡәт шаблон буйынса ғына ғәмәл ҡылыуы кешеләрҙе тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмауы ла бар бит әле.

Законға бәйле сетерекле хәлдәр хаҡында һөйләшә башлаһалар, һәр саҡ ҡәләмдәштәремдең береһе иҫемә төшә. "Киске Өфө" гәзитенең әүҙем авторы, этнограф, тарихсы, отставкалағы прокурор Закирйән Әминев ул. Башҡаларға һәр саҡ ягымлы, асыҡ йөҙлө был кешене ҡасандыр ана шул яуаплы, ауыр эштә эшләгән тип күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын. Уның менән булған бер ваҡиға элегерәк гәзитебеҙҙә лә баҫылып сыҡҡайны. "Айыумы? Ул Госстрах инструкцияһын белмәгән бит" тип аталған шаян мәҡәләне кинәнеп уҡығаным хәтеремдә. Бер яҡтан ҡарағанда, "мәҙәк" тип кенә һанарға ла булған был хәлде мин ифрат етди ҡабул иттем. Үҙен һәр төрлө хәүеф-хәтәрҙән страховкалатҡан бер кеше ниндәйҙер эш менән урманда йөрөгән сағында айыуға тап була. Әллә балаларын ҡыҙғанып, әллә ни, йыртҡыс был әҙәмде ныҡ ҡына яралап ташлай. Бәхеткә, ир тере ҡала. Дауаханала йүнәлеп сыҡҡас, зыян күреүсе үҙенең страховкаланған булыуын иҫләп, Госстрахҡа мөрәжәғәт итә. Әммә был ойошманың инструкцияһындағы "страховой случай" булырлыҡ һәр төрлө бәхетһеҙлек осраҡтары теҙмәһендә "йыртҡыс хайуандарҙан күргән зыян" тигән өлөшө юҡ икән. Клиент Госстрахтан "Бер нисек тә ярҙам итә алмайбыҙ" тигән һымағыраҡ яуап ала. Улар менән ризалашырға теләмәгән был ир прокуратураға мөрәжәғәт итергә була. Бәлә-ҡазаға тарыған кешегә ярҙам ҡулы һуҙыуҙы һәр саҡ үҙенең иң беренсе бурысы итеп һанаған Закирйән Ғәлимйән улы был эш менән ентекләп таныша. Тәжрибәле прокурор булараҡ, бар зиһенен егеп, әлеге кешегә ярҙам итеү ысулын таба. Ә Госстрах ойошмаһы зыян күреүсе клиентына "страховка" аҡсаһын түләргә мәжбүр була...

Бөгөнгө көндә хоҡуҡ һағында торған закон вәкилдәренең барыһы ла Закирйән ҡорҙаш һымаҡ киң күңелле, иғтибарлы, башҡаларҙың хәленә инә ала торған кешеләрҙер, моғайын, тигән ышанысым бар. Халыҡ тап ана шундай ғәҙел прокурор, судья, адвокаттар булыуына өмөт итә бит. Башта иҫкә алған һинд фильмындағы хәл ысынбарлыкта бер ҡасан да булмағандыр тип тә уйлайым, ә шулай ҙа... был донъяла низәр генә булмай. Бөтә буласаҡ нәмәне "инструкция"ларға индереп бөтөү ҙә мөмкин түгел, әммә һәр кемебеҙ "кеше" булып ҡалырға, бер-беребеҙгә кешеләрсә мөғәмәлә итергә бурыслыбыҙ.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, хәрби хеҙмәт ветераны.**

✓ *Сак ҡәбиләләре, төрки яҙмаһын ҡулланып, төркисә яҙғандар икән, тимәк, улар боронғо төрки телендә аралашҡан. Был фекерҙе раҫлау дәлил сифатында Яйыҡ йылғаһының боронғо атамаһы - Даих топонимын күрһәтергә була.*



ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Дүртенсе бүлек. Көньяҡ Урал гун эпохаһында



Күп кенә аспекттары буйынса төрки телле халыҡтарҙың формалашыуын һәм үҫешен сағылдырған ошо схеманы ҡабул итеп булмай. Бына, мәҫәлән, яҙма сығанаҡтарға ярашлы, Себер, Ҡаҙағстан, Урта Азия һәм Көнсығыш Европа далаларында төрки телле ҡәбиләләр абсолют күпселекте тәшкил иткән. Ошо концепция яҡлылар, мәҫәлән, нисек итеп шундай ҡыҫҡа осорҙа боронғо төркиҙәрҙең бик ҙур территорияла таралып китеп, урындағы икенсе телле халыҡтарҙан һандары һәм телдәре яғынан өҫтөнлөк алыуҙарын аңлата алмай. Бынан башҡа, бер генә тарихи сығанаҡта ла төркиҙәрҙең ошондай киң экспансияһы сағылыш тапмаған.

Билдәләп үтелгән, аңлатмалары булмаған ҡапма-ҡаршылыҡтар фонында икенсе концепция хәҡиҡәткә яҡынараҡ булып тойола, уның авторҙары б.э. III - IV быуаттарынан күпкә алдараҡ Евразия далаларын, Урта Азияны ла иҫәпкә алып, төрки телле ҡәбиләләр биләүе хаҡында нигеҙле рәүештә фараз итә. С. И. Руденко, С. Е. Малов һәм Ж. Ғ. Кейекбаев боронғо төрки руник этник берлеге формалашыуының һәм үҫешенең характерын тап ошолай итеп аңлауҙан сығып, Көньяҡ Уралдың дахмассагет төркөмө ҡәбиләләренең һәм боронғо башҡорттарҙың генетик нәҫелдәшлегенең мөмкин булыуы хаҡында һығымтаға килә. Археологтарҙан А.Н. Бернштамды ошондай уҡ фекерҙе инанып яҡлаусылар рәтенә индереп була. Ул Ҡаҙағстан һәм Урта Азия территорияһында бронза быуатында уҡ төрки телле ҡәүемдәрҙең йәшәүе мөмкинлеген фараз итә.

Күренекле башҡорт ғалимы, шәрҡиәтсе Ә.-З. Вәлиди фекеренсә, боронғо төрки этник берлеге тәү осронда Урта Азия территорияһында формалаша. Боронғо Ҡытай тарихсыларының мәғлүмәттәре мәсьәләне ошо рәүешле ҡуйыу өсөн дәлил булып тора. Айырым алғанда, улар төркиҙәр хаҡында "көнбайышта Давандән Аньсиға тиклем (Ҡокандтан Парфияға тиклем. - Н.М., Ә.С. иҫк.) төрлөсә һөйләшһәләр ҙә, көнкүрештә бик оҡшаштар һәм аралашҡанда бер-береһен аңлайҙар", тип яҙа.

Әле килтерелгән фекерҙәрҙе раҫлау өсөн Алма-Ата янында алдараҡ иҫкә алынған "Иссыҡ" ҡурғанында табылған көмөш кубок төбөндәге яҙма хәл иткес әһәмиәткә эйә. Ул осло киҫкес предмет менән яһалған һәм VII - IX быуаттарҙа йәшәгән Үҙәк Азия, Көньяҡ Себер төркиҙәренең фәнгә билдәле булған руник яҙмаһы хәрефтәре менән тулыһынса тап килгән билдәләрҙән тора.

Әммә Иссыҡ яҙмаһы билдәле руник текстарҙан мең йылға боронғораҡ һәм руниканың сак-массагет ҡәбиләләре тарафынан уйлап табылыуын дәлилләй. Билдәле тюрколог А.С. Аманжолов фекеренсә, кубок төбөнә ошондай һүҙҙәр яҙылған: "Ака сиңа усак", йәғни "Аға, һиңә был усаҡ" ("Старший брат, тебе этот очаг"), тағы ла "Без сук богун ир а азык и" - Ят кеше, теҙлән! Быуынға аҙыҡ булһын" ("Чужой, опустись на колени! Да будет у поколения пища"). Иссыҡ яҙмаһы бер нисә ракурста ҡыҙыҡлы.

Дәүләт кеүек сәйәси ойошма хасил булған хәлдә яҙма ҡулланылыуы барыһына ла билдәле, шуға күрә әле тикшерелгән ҡомартҡыны сак-дах-массагет ҡәбиләләрендә дәүләти ҡоролош булыуын раҫлау өсөн өҫтәлмә дәлил итеп ҡарап була. Хәҙер фән "Ака сиңа усак" һүҙҙәренең асылын аңлай алыу мөмкинлегенә эйә. Омск өлкәһенең Сидоровка тигән урынында 1987 йылда тикшерелгән, б.э. тиклем IV - II быуаттарға ҡараған сак ҡурғаны табылдыҡтары бында үҙенсәлекле асҡыс ролен үтәй. Тейелмәгән бай ҡәберлектә алтын һәм көмөштән ҡойолған бик күп әйберҙәр менән бер рәттән, аҫҡы өлөшө (поддоны) бейек булған ҙур бронза ҡаҙан табылған, ул формаһы буйынса ошо дәүер ҡускенселәренең Евразия далаларындағы йөҙҙәрсә ҡурғандарында табылған ҡаҙандарынан бер нисек тә айырылмай. Ҡаҙыу эштәре барышында ҡаҙан аҫтына йәтеш кенә итеп усаҡ яғыу өсөн утын да һалыныуы билдәле булды. Ошо һирәк осрай торған табылдыҡ тикшеренеүселәргә сак ҡәбиләләрендә ҡәберҙәргә бронза ҡаҙандар һалып ҡалдырылыуы хаҡында һығымта яһау мөмкинлеген бирҙе. Уларҙы һәм, бәлки, аҙыҡ һалынған балсыҡ һауыттарҙы ҡәбергә ҡуйыу йолаһын үтәгәндә ҡаҙан аҫтына утын һалып ҡалдырыу теге донъяла ла усаҡ яғыу өсөн тәғәйенләнгәндер, тип фараз итергә була. Ошондай йола, күрәһең, шул тиклем киң таралған була, ул яҙма ритуаль ҡомартҡыларҙа ла сағылыш таба. Көньяҡ Уралдың дах-массагет һәм башҡа күршеләш ҡәбиләләрендә лә ошондай йола үтәлеүе беленеп тора.

Сак ҡәбиләләре, төрки яҙмаһын ҡулланып, төркисә яҙғандар икән, тимәк, улар боронғо төрки телендә аралашҡан. Был фекерҙе раҫлау өсөн башҡа бер дәлилдәр ҙә бар. Уларҙың береһе сифатында Яйыҡ йылғаһының боронғо атамаһы - Даих топонимын күрһәтергә була; ул Птолемей картаһында ла теркәлгән (б.э. тиклем II быуат). Лингвист-тюркологтарҙың күпселеге фекеренсә, Даих (Яйыҡ) атамаһы боронғо төрки сығышлы, һәм ул киң һәм ҙур йылғаны аңлата. Ошоно иҫәпкә алып, Даих һүҙенең Көньяҡ Уралда иң боронғоларҙан булып, аныҡ датаһы билдәләнгәнен раҫларға була. Йылға атамалары, бигерәк тә ҙурҙарының, тиҙ арала ғына барлыҡҡа килмәй һәм ныҡынмай, шуға күрә төрки телле ҡәбиләләрҙең Көньяҡ Урал төбәгендә б.э. тиклем II быуаттан күпкә алдараҡ киң таралып йәшәүе хаҡында һығымта яһап була. Иң элгәре боронғо төрки телендә дах-массагет ҡәбиләләренең һөйләшеүе хаҡында әйтергә була, сөнки Даих йылғаһы атамаһының дах - даи исеме менән бәйле булыуы күҙгә бәрелеп тора.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се**




*Был башҡорт атының иң боронғо скульптураһы. Палеолит дәүере. Башҡортостандың Әбйәлил районында табылған.*

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 78*



## ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

7-се гв. атлы корпусына, биләгән позицияларын уҡсы частарға тапшырғас, 61-се армия командующийы, генерал-лейтенант Павел Алексеевич Белов яңы боевой бурыс ҡуя: Новая Рудня, Выступовичи, Красный ауылдары рубежына тиклем 90 саҡрымлыҡ марш яһарға һәм төньяҡ-көнбайыш йүнәлешендә дошман тылына рейдҡа инергә әҙер булырға. Корпус частары юлһыҙ, урманлы-һаҙлыҡлы ерҙәр аша маршҡа сыға. Тап шул мәлдә кинәт кенә йылытып ебәрә, ҡышҡы кейемдә булғас, һалдаттар йәйәү стройҙа тиргә батып бара. Припять йылғаһы аша сығыу ҙа күп ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

1944 йылдың 5 ғинуарында корпусҡа Кнуровка ауылы районында тупланырға һәм 2-се гв. атлы корпусы, 415-се уҡсылар дивизияһы менән үҙ-ара бәйләнештә, тимер юлы аша сығып, Мозырь ҡалаһы йүнәлешендә дошман тылына рейд яһарға бойорола. Мозырь рейды Полесская (хәҙерге Гомель) өлкәһендә, көнбайыштан Уборть һәм Чертень, көньяҡтан Словечна йылғалары арауығы районынан үтә. Яугирҙарға урмандар, һаҙлыҡтар аша үтергә тура килә. Бында Мозырь партизандары бригадаһы ла хәрәкәт иткәс, дошман барса ауылдарҙы яндырып, күперҙәрҙе шартлатып бөткән була. Немецтар, ағастарҙы йығып, урман юлдарына өйҙәрөп ҡуя, күп кенә урындарҙа юлдарға миналар һала.

Беҙҙең һөжүм итеүсе частарға ҡаршы дошмандың ҙур боевой төркөмө туплана: 137-се пехота дивизияһы ҡалдыҡтары, 251-се пехота дивизияһы, 25-се мотоцикл полкы, 12-се танк дивизияһының бер нисә подразделениеһы. 7 ғинуарҙа 61-се армия командующийы 7-се гв. кавкорпусына аныҡыраҡ боевой бурыс йөкмәтә: 9 ғинуар иртәһенә беренсе эшелон дивизияларына (14-се һәм 16-сы гв. атлы дивизиялары) Мелешковичи - Александровка ауылдары рубежына сығырға.

Командование бойороғона ярашлы, 16-сы гв. атлы дивизияһы (14-се гв. атлы дивизияһы менән бергә), 1944 йылдың 7 - 8 ғинуарында йәйәү стройҙа 75 саҡрымлыҡ марш яһап, дошман тылына үтеп инә. 8 ғинуарҙа Ремезы ауылы өсөн алыш башлана, бында дошмандың бер батальон пехотаһы юҡ ителә. Корпус алдына ҡуйылған бурысты үтәп, 16-сы һәм 14-се гв. атлы дивизиялары Мелешковичи-Александровка рубежына сыға. Марш еңелдәрҙән булмай: юлдарға миналар түшәлгән, уларҙы урап үтергә тура килә, ярай әле урындағы партизандар яугирҙарыбыҙҙы юлһыҙ-ниһеҙ ерҙәрҙән үтергә ярҙам итә. Бигерәк тә йылғаларҙы кисеп сығыу ауырға төшә, саперҙар көнө-төнө, алһыҙ-ялһыҙ эшләй. Күп осраҡтарҙа орудиеларҙы, тачанкаларҙы, арбаларҙы ҡул менән этәреп-һөйрәтеп сығарырға тура килә. Батҡыл һаҙлыҡтар өҫтөнә бүрәнәләр түшәлә, ҡайһы урындарҙа йылғалар аша тиҙ арала күперҙәр ҙә һалына.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ Егеттәр менән аралашҡан саҡта уларҙың элекке социаль статусы, белеме мөһим булмаған әйбергә әйләнә. Махсус хәрби операция зонаһында полиция офицеры һәм кисәге жуликтың бер окопта ятыуы ла ихтимал.



**Июнь аҙағында беҙ, Башҡортостандан бер төркөм журналист, махсус хәрби операция биләмәһендә командировкала булдыҡ. Бик күп йөнле осрашыуҙар ойоштороҙоҡ, ҡыҙыҡлы темалар алып ҡайттыҡ. Иғтибарығыҙға Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары, әле махсус хәрби операция биләмәһендә хеҙмәт иткән Азат БАДРАНОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ. Азат Шамил улы менән осрашыу фронт һыҙығынан бер нисә километр алыҫлыҡта ғына булды. Ул Башҡортостандан 700 яугир хеҙмәт иткән полкка килгәс, командир шунда уҡ рация аша беҙгә хәбәр еткерҙе: "13-сө" урында (Азат Бадрановтың позывнойы), штабҡа килегеҙ, төркөмдәргә өйөлмәгеҙ, дистанция һаҡлағыҙ". Был ваҡытта яугирҙарҙың күбеһе хәрби бурысын башҡара ине, шуға күрә Азат Бадранов янына уларҙың бер аҙы ғына килде. Төрлө яҡтан "Һаумыһығыҙ, Азат Шамил улы!", "Сәләм бирҙек, иптәш лейтенант!" тигән һүҙҙәр ишетелде. Һәм шунда уҡ күп һанлы һорауҙар яуа башланы, сөнки Азат Бадранов махсус хәрби операция зонаһында беҙҙең төбәктең рәсми вәкиле һәм уның бурысы - Башҡортостан яугирҙарының булған проблемаларын Рәсәй Оборона министрлығына еткереү.**

**Азат Шамил улы, үҙ иркегеҙ менән чиновник кабинетын ҡалдырып, Башҡортостан хәрбиҙәре менән бер рәткә тороп, махсус хәрби операция биләмәһендә булыуығыҙға һигеҙенсе ай. Ошо ваҡыт эсендә һеҙҙең аңығыҙҙа ниндәйҙер үҙгәрештәр булғанын тояһығыҙмы?**

- Бында үҙемде файҙалы итеп тойҙом, күңел гармонияһына өлгәштем. үткәреүсе тип әйтергә була. Республиканан коллегаларға ла ҙур ғына көсөргәнеш төшә, һәм улар ҙа нисек тейеш, шулай эшләй. Федераль түләүҙәр буйынса ҡытыршылыҡтар булғайны, айырыуса МХО-ның башланғыс мәлдәрендә. Мәсьәлә беҙҙең төбәк компетенцияһында булмаһа ла, хәл ителә. Радий Фәрит улы оборона министры Сергей Шойгуға мөрәжәғәт итте һәм проблеманы күрһәтеп, исемлек тапреп өлгөрмәгән йәки башҡа нимәнәлер күҙ унынан ысҡындырған икән, беҙ ҡушылабыҙ, эшләйбеҙ. Әйткәндәй, мобилизацияланғандарҙан Шайморатов йәки Доставалов батальондарында хеҙмәт итеү теләге тураһында һорауҙар килә. Быны ла хәл итеп була, ҡаршылыҡтар юҡ, иң мөһиме, подразделениеларҙа вакантлы урындар булһын.

**Башҡортостан яугиры - ниндәй ул?**

- Егеттәр менән аралашҡан саҡта уларҙың элекке социаль статусы, белеме мөһим булмаған әйбергә әйләнә. Махсус хәрби операция зонаһында полиция офицеры һәм кисәге жуликтың бер окопта ятыуы ихтимал. Бында һинең ысынбарлыҡта кем булыуың мөтарта. Үҙен тейешле урынында тип исәпләй. Һәм, ысынлап та, уның ротаһында тулы тәртип, дисциплина. Ротаһын йыш ҡына алышҡа ебәрәләр һәм егеттәре уның артынан бара. Шул уҡ ваҡытта МХО-ға тиклем "Йылан" ябай водитель булған. Бөтөнләй ғәҙәти кеше, ә һуғышта ул асылды, лидер, идара итеү сифаттары килеп сыҡты. Бындағы егеттәрҙең күбеһе шундай. Улар нисек хеҙмәт итеүе, ниндәй батырлыҡтар ҡылыуы тураһында һөйләмәй, был уларға кәрәк тә түгел. Социаль селтәрҙәр алып бара ла белмәйҙәр, тик фронтта ысын сифаттары асыла.

Тылда әле һаман беҙҙең яугирҙарҙың алғы һыҙыҡта булыуын, атышыуҙар, снарядтар шартлауын, еңеү, хәҡиҡәт, илебеҙ өсөн һуғыш барғанын аңламаған кешеләр бар. Беҙҙең ирҙәр ғаиләһе, Тыуған иле тураһында уйлап һөжүмгә бара. Улар эскерһеҙ һәм намыҫлы. Улар махсус хәрби операция биләмәһендә беҙгә ҡаршы һуғышҡан яманлыҡты туҡтатмаһаҡ, ул беҙҙең ҡалаларға, ауылдарға, өйөбөҙ тупһаһына килеүен аңлайҙар. Әлбиттә, был һуғыш элеккеләре кеүек түгел. Унда граждандар һуғышы элементы бар. Беҙҙең бер бригаданың замполиты Винница өлкәһенән. Унда уның ата-әсәһе, туғандары ҡалған. Бер туған апаһы уны ҡарғаған. Әммә ул хеҙмәт итә. Унда бөтәһенән дә зомби яһағандар, ти. Уға ни тиклем ауыр булыуын күҙ алдына килтереп була. Прокси-һуғыш бара. Бында бөтәһе лә белә: низағ Украина менән түгел, ә уның биләмәһендә НАТО илдәре менән. Күҙ алдына килтерегеҙ әле: 50-нән ашыу ил был илде ҡорал, разведка мәғлүмәттәре, кешеләр менән тәьмин итә. Имеш, ялланып һуғышҡандар күп. Мин быға ышанмайым. Улар - теге йәки был Көнбайыш иленең регуляр армияһы. Алғы һыҙыҡта поляк, француз, инглиз телмәре ишетелә. Шеврон, жетондар рәүешендә дәлилдәр бик күп.

# БЫНДА КҮП НӘМӘ БАҺАҺЫН

## иң ҡиммәтлеһе -



Урынға килеп урынлашҡас та хәрбиҙәрҙән килгән һорауҙарҙы өйрәндем, аңларға тырыштым, ә аҙаҡ уларҙы хәл итә башланым. Бында барыһы ла аныҡ: ҡара икән - ҡара, аҡ икән - аҡ, бер-береӊ менән мөнәсәбәттәр үтә күренмәле. Йәшермәйем, башта бик ҡурҡыныс ине. Фронт линияһындағы хеҙмәттең тәүге көндәре ҡурҡыуҙы еңеү тарихы булды, сөнки билдәһеҙлек менән осрашырға тура килә ине бит. Тик был минең юлым, был юлда еңеүгә өлгәштем, тип әйтә алам. Әле барыһы ла аңлайышлы. Ҡайҙа хәүефле, ә ҡайҙа тынысыраҡ икәнен аңлайым. Мәҫәлән, фронттың бар участкаһында ла бронежилет киймәйем, һәр саҡ шәхси ҡорал йөрөтмәйем, теге йәки был ауылға иртә менән барыу яҡшы икәнен беләм, ә ҡайҙалыр тик төндә йөрөйөм. Күп нәмәне тыныс ҡабул итәм. Нисек кенә булғанда ла, командование ҡуйған бурыстарҙы уйлап, иғтибарлап, ентекләп үтәргә кәрәк.

Ҡайһы берҙә минең хаҡта төрлө имеш-мимештәр барлыҡҡа килә: йә һәләк булған, йә Мәскәүҙә йөрөй, тип хәбәр тараталар, йә мине Өфөлә ресторанда күргәндәр, имеш. Тәүҙә бындай ялғанға нисек ҡарарға белмәнем. Аҙаҡ бының барыһының да ваҡ-төйәк икәнен аңланым. Әгәр яугирҙар минең хаҡта "бер нимә лә эшләмәй", "ул бында булды, тик проблеманы хәл итмәне" тиһә, ундай тәнҡитте ҡабул итеү ауыр булыр ине. Ә башҡа хәбәрҙәрҙе иғтибарға лайыҡ булмаған нәмәләр тип исәпләйем. Ярҙам иткәндән һуң яугирҙарҙан рәхмәт һүҙҙәре ишетеү мөһимерәк. Тимәк, мин дөрөҫ юл һайлағанмын.

**Башҡа төбәк яугирҙары менән нисек эш итәһегеҙ?**

- Хәрби хәрәкәттәр шарттарында иң мөһиме - бер-береңә ярҙам итеү. Күрше батальондарға ярҙам итәбеҙ. Беҙҙең яугирҙар кемгә нимә етмәй, шуның менән бүлешә. Мәҫәлән, яугир военторгта форма алған икән ти, ә бында Башҡортостандан гуманитар ярҙам

*Беренсенән, иң ҡиммәтлеһе - ғүмер, ғаилә, яҡындар. Фронтта күп нәмә баһаһын юғалта - йорт, автомобиль, техника, ҡиммәтле кейем һәм башҡалар. Бында уларҙың хаҡы юҡ. Улар өсөн бер кем дә ҡайғырмай. Иң мөһиме - ғүмер, кешеләр. Икенсенән, МХО-ла туғанлыҡ хистәре барлыҡҡа килә. Һәр кем һуңғы нәмәһе менән бүлешә. Студент ятағындағы кеүек. Егеттәр әйтеүенсә, улар ял ваҡытында тыныс ҡына ашай, йөрөй, ял итә алмай, сөнки хәрби иптәштәре бында һуғыш алып барыуын дауам итә. Миңә хәрбиҙәр менән блиндаждар, окоптар, ташландыҡ фермалар, емерелгән бисалар, хәрби позицияларҙа ҡунырға тура килде. Дежурҙа ла торҙом, бер котелоктан ашаным. Шуға күрә "туған"дың нимә икәнен аңланым. Әгәр һин һынманың икән, тимәк, ныҒындың.*

**Башҡортостан хәрбиҙәре ниндәй мәсьәләләр менән мөрәжәғәт итә, уларҙы нимә борсой?**

- Һорауҙар төрлө - социаль-көнкүрештән башлап, хеҙмәткә бәйләнерәнә тиклем. Бында шуны аңларға кәрәк: был проблемаларҙы үҙем генә хәл итмәйем бит. Мин - Радий Фәрит улы тотҡан ҙур механизмдың, ҙур системаның бер өлөшө генә. Мине махсус хәрби операцияла Хәбиров сәйәсәтен шырҙы. Ҡабатлап әйтәм, проблемалар хәл ителә.

Шулай уҡ хәрби документтар эшләткән сағында теге йәки был учреждениела булыу кәрәклегенә бәйле хәлдәр килеп сыға. Йәрәхәттәр, наградалар буйынса һорауҙар була. Кешеләр күп, төрлө хәлдәр тағы ла күберәк, айырыуса алғы һыҙыҡта. Хәрби хәлдә офицерҙарҙың беренһе ваҡытында рапорт биһим. Әллә кем булып киткән кешеләр бар, тик һуғыш уларҙы тәрбиәләй. Физик яҡтан көсһөҙ ирҙәрҙән бер кем дә көлмәй, уларҙы эштәре, кешелек сифаттары буйынса баһалайҙар. Башҡортостан яугирҙары - геройҙар. Улар - ябай, тыйнаҡ егеттәр. Мәҫәлән, "Йылан" ҡушаматлы старшина. Бөтә рота уға ҡарап тора. "Йылан"ға офицер вазифаһын тәҡдим итәләр, тик ул баш килгән. Нинә икенсе комплект кейемде үҙеңдең иптәшеңә бирмәҫкә? Ябай кешеләр мөнәсәбәттәренә ҡоролған йәнле хеҙмәттәшлек бара бында. Уның һыҙ булмай. Ҡайһы берҙә икенсе төбәк яугирҙары менән бергә оборона тотаһың. Әйтеүемсә, бында туғандар булып бөтәбеҙ. Ә ағай ағаһына ярҙам итәсәк. Әле һеҙҙең менән һөйләшеп

# ЮҒАЛТА,

## ғүмер, ғаилә, тыныс тормош

торған полкта Башҡортостан, Пенза һәм Ульяновск егеттәре хеҙмәт итә.

**Махсус хәрби операцияла башҡорт яугирҙары - йылдан ашыу, мобилизацияланғандар йылға яҡын хеҙмәт итә. Улар араһында беҙҙең яҡташтарға ғына хас йолалар булдырылдымы?**

- Дөйөм фронт аралашыу мәҙәниәте бар. Мәҫәлән, беҙ бында бер ҡасан да хушлашмайбыҙ. Иң беренсе ошоға иғтибар иткәйнем. "Хушлашмайым" тип әйтәбеҙ. Аҙ ғына таныш кешеләр ҙә бер-береһенә "туған" тип өндәшә. Бер тапҡыр төндә ҡайтып килгәндә бараһы урынға өлгөрә алманыҡ һәм күрше подразделениела туктарға мәжбүр булдыҡ. Һалдаттар бер һорауһыҙ ҡунып сығырға саҡырҙы, ашатты, ял итергә мөмкинлек бирҙе. Ошо туғанлыҡ була ла инде.

Башҡорт яугирҙарына килгәндә, фронтта "Башҡортостан" тигән бренд барлыҡҡа килде. Беҙҙең республиканы бында бөтәһе лә белә, исемле батальондар тураһында хәбәрҙар, блокпостарҙа документ күрһәтһәң, төбәкте таныйҙар. Башҡортостандың һәр ваҡыт гуманитар йөк ебәреп торғанын күптәр белә. Яугирҙар быңдай ҡеүәтле ярҙамға һоҡлана. Төрлө милләт ирҙәре үҙен башҡорт тип атай. Бер иптәшем - чечен - беҙҙең батальонға гуманитар ярҙам, тәгәрмәсле техника килтерҙе. Яңыраҡ уны осраҡҡайным, баҡһаң, контракт төҙөп, Шайморатов исемендәге батальонда хеҙмәт итергә булған. "Шайморатовсы" тигән исем тыуған ерендә уның абруйын күп тапҡырҙар күтәрәсәк, тине. Уға батальондағы мөхит, егеттәрҙең кәйефе оҡшай. Әле ул документтарын әҙерләй, оҙаҡламай хеҙмәт итә башлаясаҡ.

**Азат Шамил улы, бында ирҙәр илаймы?**

- Эйе. Хәрби иптәштәре һәләк булған саҡта. Иртән генә бергә ашап ултырҙылар, ә кисен... Бында бер кем дә күҙ йәшен йәшермәй...

**Күҙ алдығыҙҙа кешеләр үҙгәрҙеме?**

- Кемдер бөтөнләй хәмер эсеүҙән баш тартты. Йәш егеттәр бик тиҙ ир ҡорона инде. Күптәр йәшәү ҡиммәттәрен яңынан баһалай башланы. Ябай ғына төшөнсәләр - ғаилә, балалар, атай-әсәй, тыуған өй бик ҡәҙерлегә әйләнә.

**Тәрән тәьҫораттар ҡалдырған һәм ғүмер буйы иҫләрлек нәмәләр булдымы?**

- Кешеләр. Тәү сиратта улар. Иптәштәрем булып киткәндәрҙе һәм һәләк булғандарҙы һәр саҡ иҫләйәсәкмен. Егеттәрҙе юғалтыу бик ауыр. Мин һәр ваҡыт кешеләр араһында, тик бер үҙем ҡалған ваҡыттарҙа ирекһеҙҙән күҙ йәше аға башлай. Күп яугирҙар менән дуҫлаштым, улар менән бергә йәшәнек, өйҙәрендәге эштәрҙе лә ярҙам иттем, кемдер килеп рәхмәт әйтте, ә икенсе көнөнә ул юҡ... Яңыраҡ "шайморатовсыларға" генерал Шайморатов миҙалдарын тапшырҙым. Бүлкләнеүселәр араһында рота фельдшеры ла бар ине. Шәп егет. Пулялар аҫтынан яралы хәрбиҙәрҙе һөйрәп сығара, уларҙы тыныс урынға алып китә ине. Миҙал тапшырғандың икенсе көнөнә ул һәләк булды, заданиенан ҡайтманы. Һәр яугир Аллаһы Тәғәләнең уны нисек уттан һаҡлап ҡалғанын иҫләй. Тик "шайморатовсылар", "доставаловсылар", мобилизацияланғандар һуғыш алып барыуын дауам итә, улар резервта тормай, ә ут линияһында йөрөй.

**Башҡорт хәрбиҙәрен командование нисек баһалай?**

- Беҙҙең хәрбиҙәрҙең мотивацияһы бик юғары. Командирҙар быны йыш билдәләй. "Шайморатовсы"ларҙы әйтәм, улар иң яҡшыларҙың береһе тип иҫәпләнә. Батальонда юғары дисциплина, юғалтыуҙар әҙерәк, хәрби файҙа күберәк. Мобилизацияланғандар буйынса. Өфөнән "Толпар" спецназы отряды беспилотниктар менән эшләүҙә махсуслашҡан. Уларҙың лабораторияһы, оҫтаханаһы, 3D-принтерҙары бар, улар БПЛА йыя, башҡа хәрбиҙәрҙе өйрәтә. Федераль яңылыҡтарҙа улар тураһында һөйләйҙәр, егеттәр менән ғорурланам. Дошман да был яугирҙарҙы белә һәм улар менән осрашыуҙан ҡасырға тырыша.

**Махсус хәрби операция биләмәһендә хеҙмәт итеү ҡарары тураһында үкенмәйһегеҙме?**

- Юҡ. Бында килергә теләгем эмоциональ булды, уға бер нисә тарих йоғонто яһаны. Бында ҡустым танкист булып хеҙмәт итә, уны һуғыш тапҡыр биш йәшлек сағында, егерме йыл элек күргәйнем. Йүнәлештәрҙең береһендә ҡаты танк һуғыштары бара, ул уларҙа ҡатнаша. МХО биләмәһенә яҡташтарым - Архангел, Ҡырмыҫҡалы районы егеттәре китте. Оҙатҡан саҡта ауыр уйҙар биләп алды: улар һуғышҡа китә, ә мин республикала ҡалам. Өлөшләтә мобилизация башланғас иһә, патриотизм һүҙ түгел, ә эш талап итте. Шул саҡта добровольцтар һәм мобилизацияланғандар менән бергә булырға кәрәк икәнен аңланым. Уларҙың һәр береһенең тик үҙҙәре генә белгән мотивацияһы бар. Урыным улар янында кеүек ине, һәм барыһы ла ошолай килеп сыҡҡанға, яныңда дуҫтарым булыуына шатмын.

Мәҫәлән, Илмир дуҫым МХО биләмәһенә Мәскәүҙән килде. Баш ҡалала уҡый, дәүләт хеҙмәтендә эшләй ине. Мобилизация башланғас, шунда уҡ минең менән барам тине. Ә үҙенең броны һәм өс балаһы бар. Икенсе иптәшем - Салауат - Рәми Ғарипов исемендәге гимназия-интернаттан. Беҙ бала саҡта бер бүлмәлә йәшәнек. Аҙаҡ ул хәрби белем алды һәм тормош юлдары айырылып торҙо, әле яңынан осраштыҡ. Ул да әйтте: "Азат, һинең менән барам". Хәрби әҙерлек үткәндә уға әйтәм: "20 йыл самаһы элек бер бүлмәлә йәшәнек, бәлки, шулай булмаһа, һинә фронтҡа барырға тура килмәҫ ине". Ә ул миңә: "Ул осраҡта бында кем менән барыр инең һуң?" - тине. Салауат элемтә взводы командиры булып хеҙмәт итә, көн һайын ғүмере хәүеф аҫтында, үҙенең егеттәре менән батальон подразделениеларын бәйләнеш менән тәьмин итә. Был эштең асылын аңлар өсөн күҙ алдына килтерегеҙ: алыш бара, атыш, ә элемтәселәр ҡорамалдары һәм сымдары менән һуғыш яланы буйлап шыуышып бара. Шуға күрә хәҙер шундай уйға килəм: мин Салауат менән киттем, ә ул минең менән түгел.

Ошондай йылы туғанлыҡ хистәре күп егеттәргә хас. Пензанан бер эшҡыуар бар, автосервистар селтәре тота. Ғаиләһе аҡса менән тәьмин ителгән, тик ул бында хеҙмәт итеүҙе һайлаған. Питерҙан пластик хирург бар, бында ул - фельдшер. Күптәр аҡса өсөн килмәгән. Егеттәр ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя, унһыҙ булмай, тик барыбер аҡса әллә ни мәғәнәгә эйә түгел. Әлбиттә, финанс яғы ла бар, тик патриотизм көслөрәк.

Батальондарҙа хеҙмәт иткәндәр хәрби әҙерлек үтә. Бында үҙебеҙҙең полигон бар. Мәҫәлән, механик-водителдәрҙе, гранатометчиктарҙы, минометчиктарҙы айырым уҡыталар. Барыһын да алалар, кешенең мотивы, сәбәптәре мөһим. "Запасниктар" ҙа бар. Хәрби тәжрибә яйлап туплана. Уның булмауы ҙур минус түгел, уны йыйып була.

**Азат Шамил улы, һеҙ үҙегеҙ өсөн төп нығымта яһанығыҙмы?**

- Беренсенән, иң ҡиммәтлеһе - ғүмер, ғаилә, яҡындар. Фронтта күп нәмә баһаһын юғалта - йорт, автомобиль, техника, ҡиммәтле кейем һәм башҡалар. Бында уларҙың хаҡы юҡ. Улар өсөн бер кем дә ҡайғырмай. Иң мөһиме - ғүмер, кешеләр. Икенсенән, МХО-ла туғанлыҡ хистәре барлыҡҡа килә. Һәр кем һуңғы нәмәһе менән бүлешә. Студент ятағындағы кеүек. Егеттәр әйтеүенсә, улар ял ваҡытында тыныс ҡына ашай, йөрөй, ял итә алмай, сөнки хәрби иптәштәре бында һуғыш алып барыуын дауам итә.

Минә хәрбиҙәр менән блиндаждар, окоптар, ташландыҡ фермалар, емерелгән биналар, хәрби позицияларҙа ҡунырға тура килде. Дежурҙа ла торҙом, бер котелоктан ашаным. Шуға күрә "туған"дың нимә икәнен аңланым. Әгәр һин һинманың икән, тимәк, нығындың. Өсөнсөнән, бында карма мәсьәләһе, йәғни насар уй-ниәт өсөн яза бик тиҙ ғәмәлгә аша. Бер осраҡ беләм: күрше подразделение егеттәре, еңел генә йәрәхәт алһаң ине, һөҙөмтәлә түләүҙәр, ярты йыл ял була, тигән. Әйтеп тә бөтмәгәндәр, блиндажға инеү менән снаряд килеп тә төшкән. Әгәр тыныс тормошта карма оҙаҡ йөрөһә, фронтта бик тиҙ ғәмәлгә аша.

**Әйткәндәй, Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Азат Бадранов былтыр көҙ үҙ теләге менән фронтҡа китергә ҡарар итә. Махсус хәрби операция биләмәһендә 2022 йылдың ноябренән Рәсәй Геройы Миңлегәле Шайморатов исемендәге батальонда хеҙмәт итә. Ә һуңғы ике айҙа 3-сө армия корпусының сәйәси бүлеге офицеры булып хеҙмәт итә. Шулай уҡ республика хәрбиҙәренә ярҙам күрһәтеү һәм егеттәргә гуманитар йөк килтереүҙе координациялай.**

Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.

...ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ЛИМОН ТОТТОРҒАНДАР ИКӘН...

## һин унан лимонад яһа

**Яҙыусы, публицист һәм педагог Дейл Карнеги "донъяла насар кешеләр булмай" тигән фекерҙә һәм принципта йәшәгән. Уның өсөн бары күңелгә ятып бөтмәгән холдәр генә була, ләкин уларға ҡаршы көрәшергә мөмкин: тик улар кешеләрҙең тормошон һәм кәйефен генә боҙмаһын. Быны ошо хаҡта ул китаптарында яҙған, лекциялар уҡыған. Был шәхескә төрлөсә мөнәсәбәттә булырға мөмкин: уҡырғамы уны, юҡмы, уның кәңәштәрен тоторғамы, юҡмы - һәр кемдең үҙ ихтыярында. Ләкин уның хеҙмәттәренән һайлап алынған ошо 25 цитатаһы менән генә лә мәшһүр психолог билдәлелек яулай алыр ине.**

- Һәр кем көнөнә биш минут ҡына булһа ла иҫәрлек күрһәтә ала. Ысын аҡыл ошо сикте үтеп китмәүҙә күренә.
- Бал йыйһың килһә, умарталарҙы туҙҙырма.
- Бөгөнгөлә үткәндең йөгөнә өҫтәлгән киләсәк йөгөн дә артмаҡлап алыу иң көслөләрҙе лә хатта юлында әлегеп йығылырға мәжбүр итә.
- Йылмайыу бер ни тормаһа ла, юғары баһалана.
- Яҙмыш ҡулыңа лимон тотторған икән, һин унан лимонад яһа.
- Кеше үҙ-үҙенә яу аса икән, ул, тимәк, нимәгәлер торошло.
- Ирегеҙҙең, һис шикһеҙ, етешһеҙлектәре бар! Әгәр ул изге булһа, бер ҡасан да һеҙгә өйләнмәҫ ине.
- Һәр ваҡыт ни менәндер мәшғүл булығыҙ. Был ер йөҙөндәге иң арзан дауа һәм ул иң файҙалыһы ла.
- Йөҙөгөҙҙәге сырайығыҙ кейгән кейемегеҙҙән күпкә мөһимерәк икәнде онотмағыҙ.
- Кемделер үҙгәртергә теләйһең икән, үҙеңдән башла. Был файҙалыраҡ та, хәүефһеҙ ҙә.
- Ниндәйҙер ғәмәлең арҡаһында килтереләсәк насар эҙемтәләр ихтималлығын күҙ алдыңа килтергәс, ошоноң менән килеш тә, шунан ғына эшкә тотон.
- Кешенең исеме - ниндәй генә телдә лә уның өсөн иң яғымлы, иң мөһим өн ул.
- Беҙҙең бәхетһеҙлектәребеҙҙең сере шунда - бәхетлеме беҙ, әллә юҡмы тигән уйланыуҙар өсөн буш ваҡытыбыҙҙың ифрат күп булыуы.
- Аҡыллы кеше өсөн һәр көн яңы тормош башлана.
- Күптәр ни бары уны тыңлаусы кәрәк булғанда, табип саҡырта.
- Балаларҙың өлкәндәр әңгәмәһен тыңларға яратыуын бер ваҡытта ла иҫтән сығармағыҙ һәм һаҡ булығыҙ.
- Кешеләрҙең миндә лә, һеҙҙә лә эше юҡ. Иртән дә, төш тә, кис тә улар үҙ эштәре менән генә мәшғүл.
- Иртәгә тигән нәмә юҡ ул. Кешенең ҡотолоу көнө - бөгөн.
- Һеҙгә ҡаныҡҡан дошмандарығыҙҙан ҡурҡмағыҙ, ялағайланған дуҫтарығыҙҙан ҡурҡығыҙ.
- Һеҙҙең алда кеше холҡонон ғәмәле: ул теләһә кемде ғәйепләйәсәк, тик үҙен генә түгел.
- Ҡурҡыу һеҙҙең мейегеҙҙән башҡа бер ерҙә лә юҡ ул.
- Үҙегеҙҙе башҡа кеше урынына ҡуйып, уға ни кәрәклекте аңлай белегеҙ. Шул саҡ бөтөн донъя һеҙҙең менән булыр.
- Нимәгәлер өйрәнергә көслө теләгең булыу - уңыштың яртыһы ул.
- Үҙеңде бәхетле кеше кеүек тот, һәм һин ысынлап та бәхетлерәк булырһың.
- Был донъяла һөйөү ҡаҙаныуҙың бер генә юлы бар - уны талап итеүҙән туктап, яуап хисенә өмөт тотмайынса ғына башҡаларға һөйөү тарата башларға.

***✓ Һәндерә аҫтында ҡалыусылар сәй эсеп, ул-был итеп тә өлгөрмәнеләр, һауын бейәләренән, тай-тулаҡтан торған йөҙләп баштың йәйләү ситендәге ҡайындар араһынан эркелеп килгәне лә күренде.***



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

# ТУРАЙҒЫР ҺАБАҒЫ

(Хикәйә)

Ҡунаҡтар Ҡаҙыршаға килеп төшкәндән һуң бер сәғәт үтеүгә келтер-келтер йырлаған арба тауышын тыңлап, йәйләүгә табан китеп баралар ине инде. Көн салт аяҙ. Арбаға егелгән күк байтал һарҡыу ерҙәр осраһа, йүгереп бара ла, үргә тартылғанда атлауға күсә.

Насибулла олаталары апаруҡ ер барғанса бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Оло кеше шым барғас, йәштәр ҙә уға һүҙ ҡатыуҙы әҙәпһеҙлек тип тапты. Байтаҡ юл үткәс, хужа кеше егет менән ҡыҙҙы берсә һағышландырып, берсә шатландырып, ишетелер-ишетелмәҫ итеп халыҡ йырҙарын һуҙа башланы:

*Әрмеләргә китеп*
*сәс еткерҙем,*
*Сәскенәйем етте лә*
*үрмәгә...*

Уның тауышы арбаның дыңғырлағына ҡушылып үҙенсәлекле оркестрҙы барлыҡҡа килтергәндәй. Өҫтәүенә, арба тәгәрмәстәренең кәлтәңләп берсә өҫкә-аҫҡа, берсә ян-яҡҡа тайшанып һелкенеп килеүе мулланың тауышын һиҙелер-һиҙелмәҫ ваҡ-ваҡ тулҡындарға бүлеп ыҡсымлай төҫлө. Бындай бүленеш йырсының көслө булмаған моңло тауышын тик боронғо йырҙарға кәрәкле һығылмалы боролоштарға көйләгәндәй. Хәс тә көйҙө оҙата барыусы гармун, ҡурай кеүек арба дыңғырлағы.

Иршат менән Зәлиә тәүге тапҡыр ошондай кисерештәр солғанышында. Ҡарәле, тип уйлайҙарҙыр әле, моғайын да, егет менән ҡыҙ. Быға тиклем улар "ат, арба" тип кенә белгән кешелек тарихының иң боронғо дәүеренән алып һаҡланып ҡалған транспорт төрө Насибулла олаталарының йыры менән ҡушылғанда шундайын мөғжизәгә әүерелә ала икән. Йәштәр бығаса өнәп еткермәгән боронғо халыҡ йырҙары тап ошондай рәүешле башҡарылған сағында шундайын зауыҡлы, йәнде илерткес яңғырашлы икән. Насибулла ҡарт бер йырҙы тамамлауға икенсеһен башлап та ебәрә:

*Ялан ғына ерҙән болан килә,*
*Уйһыу ғына ерҙән, ай,*
*түтә, тип,*
*Зәлхизә...*

Бығаса барлыҡ халыҡ йырҙары ла бер-береһенә оҡшаш, бер көй менән башҡарыла тип уйлай ине йәштәр. Баҡтиһәң, "Әрме" менән "Зәлхизә" бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған, икеһе ике төрлө аһәңле икән дә.

Иршат менән Зәлиәгә шул тиклем рәхәт тә, икенсе яҡтан уйлаһаң, ата-әсәләре менән өйләнешеү мәсьәләһе буйынса тартҡылашыуҙарын күҙ алдына килтерһәләр, ҡыйын да. Барыбер ҙә улар ата-әсәһенә оло рәхмәтле. Тәүҙә улар риза булмайынса ҡыланған ғына икән. Ә үҙҙәре Ҡаҙыршаға килеп, Насибулла мулла менән һөйләшеп-килешеп, уларға ана ниндәй никах алды сәйәхәте ойоштороп йөрөгәндәр. Аңламаҫһың уларҙы. Һәр хәлдә, Насибулла олаталары һуҙған йыр тәьҫиренә бирелгән егет менән ҡыҙ әлегә тик ошо хаҡта ғына уйлай ала. Башҡаса мөмкин дә түгел. Тимәк, олаталары йәйләүгә барғас та, уларға тағы ла мөғжизә бүләк итәсәк. Улар ошо мәлдә йәйләү юлының һәм ҡарттың йырының мәңгегә һуҙылыуын теләй.

Тик улар Насибулла мулланың йыры аша күңелдәренә уйылған һағыштың асылын ғына аңлай алырлыҡ түгел. Быға, моғайын да, икеһен бер хисле, бер уйлы иткән тойғо ҡамасаулайҙыр. Барыбер ҙә юлға сыҡҡандан алып бер һүҙ ҙә ҡатмайынса, бәғерҙәрен өҙөрҙәй итеп моң аша ишара, кинәйә ташлауы барыбер ҙә аңлашылып торғандай. Хикмәте булмай ҡалмаҫ тота килеп, юлыңғай ғына башҡарылған йырҙарҙың. "Донъяла бер нәмә лә осраҡлы түгел, һәр бер осраҡлы күренештә объектив ысынбарлыҡ сағылыш таба..." тип ҡабатларға ярата уларға тарихтан һабаҡ биреүсе уҡытыусыһы...

Әммә ситтән ҡараған кешегә генә ул шулай тойолалыр, сөнки олаталарының моңона һағышланһалар ҙа, Иршат менән Зәлиә бөгөн шат. Бөгөн уларҙан да бәхетле кеше юҡ донъяла. Улар йәйләүгә ҡушылырға тип китеп бара...

Юлдың башы бар ҙа, аҙағы бар. Ат ҡыуыусы әллә бишенсе, әллә алтынсы йырын һуҙа башлауға йәйләүгә барып та еттеләр. Уларҙы ап-аҡ ҙур эт абалап ҡаршыланы. Тәүҙә йән-фарман сабып килә бирҙе лә, хужаһының атын һәм үҙен танығас, ҡойроғон ҡойроҡ аҫтына ҡыҫтыра биреберәк, тик эт лөғәтендә генә аңлашылған ишара яһаны. Ә инде арбалағы ике ят кешене күргәс, ҡабаттан бер-ике тапҡыр өрөп алды. Яңы кешеләргә кемдең йәйләүҙә төп йән эйәһе, хужа икәнен аңғартырға теләне буғай. Кем генә булһағыҙ ҙа, әллә кем түгелһегеҙ, йәнәһе. Мин һеҙгә тауышымды әрәм итеп өрөп тә тормайым. Хужамдың арбаһында килгәс, моғайын да, яман эсле түгелһегеҙҙер...

- Себә, Етебал, әллә беҙҙе танымайһыңдамы? - Насибулла мулла мәтриләп этенә бармаҡ янап алды. - Ҡунаҡтар килә, бар, тегеләргә әйтә тор, ҡаршы алһындар...

Етебалға шул ғына кәрәк булған икән. Ул атҡа ҡаршы килгән тиҙлектән тағы ла шәберәк сабып китеп, йәйләү уртаһында ултырған кескәй йорт янына барып, ундағыларға эт лөғәтендә ни хаҡындалыр йөүкәләп өрөп алды. Шунан һуң, инде минең өҫтән бурыс төштө, тигәндәй кинәйә менән йорт янындағы кескәй аласығына инеп боҫто.

Арбанан төшөп бот-арҡа яҙып алғас, Насибулла мулла атын туғарырға кереште. Иршат менән Зәлиә иһә фермерҙарҙың торағын күҙ уңынан үткәрҙе. Уҫаҡтан бурап эшләнгән йорт ыҡсым ғына күренә. Йорт янындағы башы көпләнгән һәндерә аҫтында ризыҡланыр өҫтәл, ағас ултырғыстар күҙгә ташлана. Шундағы ҡайынға ҡулйыуғыс беркетелеп ҡуйылған. Йорттан йөҙ аҙым ситтә ялан кәртә, уның бер яҡ ситендә бейә һауыр өсөн махсус урындың башы ҡапланған. Ялан кәртәнең арғы осондағы тағы ла бәләкәйерәк кәртә эсендә ҡолондар, тағы ла айырым бер бүлемендә өс баш йылҡы малы күренә. Шунда уҡ егеүле ат арбаһынан ир кеше менән ун-ун бер йәштәр самаһындағы малай айырып бикләнгән йылҡы малдарына бесән бушата. Улар йорт янына килеп етеүселәрҙе күреп ҡалды ла, был яҡҡа килә башланы. Былары Насибулла мулланың фермер улы Әнүәр менән ейәне Садиҡ икән.

Улар менән күрешкән арала йорт артынан ҡулына күнәк тотҡан ҡатын килеп сыҡты. Үҙенең йылмайыуы. Башына килешле итеп аҡ яулыҡ ябынған. Өҫтөндә ап-аҡ халат. Егет менән ҡыҙ шундуҡ таныны: ауылда саҡта мулланың абыстайы Зөләйха инәй телгә алған Әнүәр улының ҡатыны, бейә һауыусы Сәлимә икән.

- Ҡайным, һаумы, бәй, ҡунаҡтар ҙа бар икән. Хәҙер мин һеҙгә һыуһынға һаумал ҡымыҙҙы ауыҙ иттерәм. Эсә тороғоҙ, хәҙер самауырым ҡайнап сығыр...

Сәлимә башта ҡулындағы биҙрәһен ҡойма бағанаһындағы оло ҡаҙауға элеп ҡуйҙы. Артабан өйгә осоп тиерлек инеп китеп, шундай уҡ тиҙлектә банка менән ҡымыҙ тотоп сығып һәндерә аҫтындағы өҫтәл янына килде. Шундай уҡ етеҙ хәрәкәт менән түңкәреүле сынаяҡтарҙы әйләндереп теҙҙе лә, һәр береһенә ҡымыҙ ҡойоп сыҡты. Хәрәкәтенә, ҡулдарына күҙ эйәрмәй үҙенең.

Ауылда тыуып үҫһәләр ҙә, Иршат менән Зәлиә өсөн бындағы күп нәмә яңы ине. Шул уҡ ҡымыҙҙың тәменә килгәндә лә. Һаумал тигәндәре бигерәк икән дә. Күпереп тора. Һалҡынса, әселеге менән йәнде өтөп тә алмай, шул уҡ ваҡытта эскәндән һис ҡасан булмағанса күңел күтәренкелеге кисерәһең. Тағы ла, тағы ла, күп итеп эске килә. "Ҡымыҙ ҡымыҙ бешкән ерҙә тәмле була" тигәндәре шул икән. Дөрөҫ икән.

Ара-тирә ҡолондарҙың инәләрен саҡырып сыңғырап ебәреүҙәре, яҡындағы шырлыҡта ҡоштарҙың йәмле итеп һайрауҙары, сиңерткәләр йыры, ғөмүмән, йәйләү тигән хикмәтле урындың йәшерен серлелеге, илаһи матурлығы Иршат менән Зәлиәгә бер-береһен тағы ла тәрәнерәк итеп аңларға ярҙам иткәндәй. Бейә һауып, ҡымыҙ эсеп йәйләүҙә көн итеүсе атай-олатайҙары, өләсәй-ҡартәсәйҙәре ҡайһылай бәхетле булған.

Йәйләүҙә минут һайын тиерлек мөғжизәләр тыуып тик тора. Үҙенән-үҙе. Теләмәһәң дә. Күмәкләп һәндерә аҫтында сәй эсеп ултырғандарында кемдеңдер кеҫәһендә ятҡан телефонға смс-хәбәр килгән сигнал яңғыраны. Сәй һемереүсе Садик кеҫәһенән телефонын алып ҡараны ла:

- Атай, ҡартатай, өйөр биләмәнән сығып бара. Мин хәҙер...

Шулай тине лә малай алдындағы сәйен дә эсеп бөтмәҫтән ҡартатаһы туғарып бәйләп ҡуйған атты ысҡындырып, менеп тә атланды. Ул арала атаһы:

- Садиҡ, һауыр мәл етә. Бер юлы өйөрҙө бында ҡыу ҙа ҡуй, - тип әйтә һалды.

- Ярай, атай, - булды улының яуабы.

Садик гүйә ат өҫтөндә тыуған тиерһең. Яңы ғына улар менән бергә ултыра ине, егерме секундтан һуң атына атланып, йән-фарман сабып та китте. Күҙҙән дә юғалды. Һәндерә аҫтында ҡалыусылар сәй эсеп, ул-был итеп тә өлгөрмәнеләр, һауын бейәләренән, тай-тулаҡтан торған йөҙләп баштың йәйләү ситендәге ҡайындар араһынан эркелеп килгәне лә күренде. Садиктың эсә башлаған сәйе һыуынып та өлгөрмәне хатта. Иң алда башын юғары сөйөп туры айғыр килә. Ана, арттағы һыбай. Садик. Ул өйөргә йәбешеп алған кеүек, бер аҙым да артта ҡалмай елдерә. Был күренешкә ҡараһаң, күңелгә әллә ниндәй уйҙар килә. Тик Садик янында өйөрҙөң ситкә китеүе хаҡында смс-хәбәр ебәреүсе көтөүсе генә күренмәй.

- Ҡарәле, Иршат, ҡара, ниндәй матурҙар... - Йәйләүгә килгәндән алып Зәлиәнең тәүләп өндәшеүе был.

- Әйҙә, ҡапҡаны асайыҡ та, өйөрҙө ялан кәртәгә индерешәйек...

Иршат шулай тине лә, ялан кәртә яғына ынтылыш яһаны. Тик һуңланы. Әнүәр ағай күптән инде ҡапҡаларҙы шар асып ҡуйған.

Тағы ла биш минуттан Сәлимә бейәләрҙе һауа ла башланы. Һәр кем үҙ эше менән булды. Иршат менән Зәлиәне иң аптыратҡаны шул: йәйләүҙә бар эштәр ҙә тиҙ генә, аныҡ һәм теүәл итеп башҡарыла. Йәйләүҙә һәр ғәмәл тиҙлеккә һәм ыҡсымлыҡҡа ҡоролған. Бында тағы ла бер, биш минуттан һуң нимә булырын белеп булмай. Бер кем дә, бер кемгә лә бер ниндәй ҙә эш ҡушмай, һәр кем үҙ эшен белә. Бына әле Әнүәр ағай ҡатынына бейә һауырға булыша, уҫалыраҡ йәш бейәләрҙе аран араһына индерергә ярҙамлаша. Насибулла мулла айырым бикләп ҡуйылған өс баш йылҡы янында ниҙер эшләп маташа. Садик ат егә. Егет менән ҡыҙ уның янына килде.

- Садиҡ,аңлат әле, һиңә бая өйөрҙөң ситкә китеүе хаҡында кем смс ебәрҙе ул? - Иршат уға күптән бирергә теләгән һорауын еткерҙе.

- Глонас, - булды ҡамыттың тамаҡ бауын тубығын терәп тартып бәйләүсе Садиҡ, уға ҡарамайынса ғына.

- Глонас? Ул кем, әй, нимә ул?

- Нимә булһын, көтөүсе...

- Көтөүсе?

- Эйе...

- Ә ул нисек итеп өйөрҙө көтә һуң?

- Ябай ғына. Махсус Интернет программа инде, йыһандағы яһалма ер юлдашына, ҡапҡа тоташтырылған. Беҙҙең өйөр айғырына датчик ҡуйылған. Әгәр ҙә айғыр беҙҙең көтөүлек биләмәһенән бер метр ғына ситкә сыҡһа ла, датчикҡа сигнал килмәй башлай һәм ер юлдашынан минең телефонға смс килә...

- Уны һеҙ ҡайҙан алдығыҙ? Программаны әйтәм...

- Уны беҙгә Илсур ағай Ирназаров эшләп бирҙе. Уның тағы ла "ЖПС" тигән программаһы бар. Әммә ул программа буйынса таулы урындарҙа бәйләнеш юғалып тора, ә "Глонас" менән хатта тау-урмандар араһында ла мал көтөргә була...

Был турала һөйләгәндә Садик үҙен бик иркен, ябай итеп тота. Башҡа берәү булһа, шуны ла белмәйһегеҙме ни, тигән ишара менән танауын сөйөп маташыр ине. Атын егеп бөткәс малай өйҙөң бер яҡ ситенә терәтеп эшләнгән кескәй генә келәттән салғы, һәнәк алып килеп арбаһына һалды ла:

- Миңә урманға барып ҡолоҡастарға бесән сабып алып килергә кәрәк, - тип дилбегәһен тотоп атын бора ла башланы. Арбаһына һикереп ултырҙы ла, китеп тә барҙы.

**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

✓ *Көнө буйы шулай йөрөй, сарсаһа, шишмәнән һыу эсә, асыҡһа, ҡырҙағы, баҫыу буйында үҫкән ҡарағураны ашай, мәгәр артыҡ тамаҡ булғыһы килмәгәндер, күрәһең.*



ХӘТЕРЛӘП...

# ИЖАДИ ЭҘҘӘРЕ ҠАЛДЫ

**Хәтирәләр һәр кемдең артынан эйәреп йөрөмәй: күптәр туғандары хәтерендә ҡала, уҡытыусының эшен уҡыусыһы дауам итә, остаз данын шәкерттәре тарата, ижадсыларҙы ижади емештәре мәңгеләштерә. Йылайыр районы Юлдыбай ауылында билдәле режиссер Азат Нәҙерғоловтың хәтер кисәһе булып уҙҙы. Талантлы шәхесте иҫкә алыу тураһында һорашып, уҡыусыһы Денис Нурғәлингә мөрәжәғәт иттек:**



- 2021 йылдың 2 декабрендә Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында "Тау артында ниҙәр бар?" спектакленең премьераһы булды. Ҡыҙғаныс, был ижад емеше Азат Әхмәҙулла улы Нәҙерғоловтың Урал аръяғында ҡуйған һуңғы сәхнә әҫәре булып хәтерҙә ҡаласаҡ. Ул театр менән һәр саҡ бәйләнештә булды, беҙҙә күп спектаклдәр сығарҙы. Сибайҙы ярата ине, бында килгәндә лә, Өфөгә ҡайтҡанында ла Белорет аша йөрөмәне, урау булһа ла, Стәрлетамаҡ, Ейәнсура, Йылайыр аша йөрөй торғайны. "Йөҙ саҡрымға урау бит, нинә ул юлдан йөрөйһөгөҙ?" тип һораным бер мәл. "Мин шул яҡтан йөрөргә яратам, үҙемдең тыуған ауылым Юлдыбай аша үтәм, килгән-ҡайтҡанда тыуған яҡ һауаһын һулайым", - тип яуап бирҙе ул.

Ҡайғылы хәбәр ишетеп, һуңғы юлға оҙатырға йыйынғанда, һауа шарттары арҡаһында, Өфөгә юлды япҡайнылар, матди ярҙамыбыҙҙы ебәрҙек, үҙебеҙ бара алманыҡ. Шунда ҡырҡына тыуған ауылы Юлдыбайҙа хәтер кисәһе үткәрергә, тигән уй килгәйне. Йылайырҙар теләгебеҙҙе ыңғай ҡабул итте, билдәле режиссерҙың исемен мәңгеләштереү өсөн тыуған ауылындағы урамға уның исемен биреү ниәтен дә кире ҡаҡманылар.

Ысынлап та, Азат Әхмәҙулла улы бындай иғтибарға лайыҡ шәхес. Ул бик универсаль кеше булды: йыр-бейеүгә оҫта ине, актер, режиссер булараҡ та тамашасылар күңелен күптән яулағайны. Хәтер кисәһен үткәргәндә уның йәш сағында башҡарған "Йондоҙло юл" тигән йыры төп лейтмотив булып күңелдәргә һағыш өҫтәне. Башҡортостандың халыҡ артисы Зифа Баязитованың талантлы шәхестең ижад юлын бәйән итеүе мәрхүм хөрмәтенә доға кеүек яңғыраны. Азаттың атаһының бер туған апайы Шәмсинур Нәҙерғолова уның бала сағы тураһында һөйләгәндә күҙгә йәштәр төйөлдө. Спектакль тамамланғас, халыҡ экрандағы Азат Әхмәҙулла улы Нәҙерғоловтың фотоһына ҡарап, ҡул саба башланы. Ғәҙәттә, тамаша һуңынан актерҙар режиссерҙы сәхнәгә саҡыра. Был тетрәндергес күренеш шуға оҡшағайны: залдағылар илай, актерҙар ҙа күҙ йәштәрен тыя алмай - һәм бер туҡтауһыҙ алҡыштар!

Азат Әхмәҙулла улы - минең уҡытыусым, ул беҙҙә режиссерлыҡ буйынса уҡытты. Беҙ уның менән һәр саҡ тығыҙ бәйләнештә булдыҡ, хәлдәрҙе белешеп торҙоҡ. Февралдәге ҡышҡы сессия ваҡытында һуңғы тапҡыр осрашҡанда уның эш кабинетында ике сәғәттәй һөйләшеп ултырҙыҡ. "Сибайҙы һағындым", тип, театрҙа эшләгән һәр кемдең хәлен белеште. "Мин Сибай театрын аңланым, ул бик үҙенсәлекле, ғүмерле театр", тине, уныштар теләне. Шунан һуң телефон аша ғына аралашып торҙоҡ, бөтөн күрешергә яҙманы. Ул ғүмерендә үҙ миссияһын тулыһынса үтәгәндер тип уйлайым - актер булараҡ та, режиссер булараҡ та, ғөмүмән, сәнғәт тормошона ҙур өлөш индергән шәхес булараҡ та. Башҡортостандың ниндәй театрын алһаң да, ул ҡуйған спектаклдәр бар - сәнғәттә уның эштәре, ижади эҙҙәре ҡалды.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

МАТУР ХӘТИРӘ

# ӘЛДӘ, ТИМЕН, ЙЫРҘАРЫБЫҘ БАР...



**Минең бәләкәйҙән етем ҡалып, Өфөлә балалар йортонда тәрбиәләнеүем хаҡында иҫтәлектәрем байтаҡ. Теге йәки был сәбәп менән шул замандағы ваҡиғалар иҫемә килеп төшһә, бала саҡ хәтирәләремде "Киске Өфө" гәзите уҡыусылары менән уртаҡлашҡы килә лә тора. Әлеге күҙлектән уларҙың һәр берећенә лә ниндәйҙер ғибрәт тә, һағыш та, юмор ҙа һалынған була ғәҙәттә. Эй, кереһеҙ бала саҡ йылдары...**

...Беренсе синыфты беҙ баш ҡалабыҙҙың Пушкин урамындағы 1-се һанлы балалар йортонан Красин урамындағы 9-сы мәктәпкә йөрөп уҡыныҡ та, йәйге каникулдар үткәс, беҙҙе ошо мәктәп ҡарамағына алып барып тапшырҙылар. Килеп урынлашҡандың икенсе көнөнә, яңы килгән балаларҙы ҡарарға тип, беҙҙең янға ҙур синыф ҡыҙҙары килеп инде һәм "Кем һеҙҙең төркөмдә атаманка булды?" тигән көтөлмәгән һорау бирҙеләр. Беҙ ни, бер-беребеҙгә ҡарашып, ҡурҡышып ҡалдыҡ. Шул саҡ арабыҙҙан береү "Фәүзиә!" тип ҡысҡырмаһынмы! Исемемде ишеткәс, мин тағы ныҡыраҡ ҡурҡа төштөм. Был ҡыҙҙар сығып киткәйне, әлеге минең исемде ҡысҡырыусыһын Фәкиһә икәнен белеп, уның эргәһенә килдем һәм: "Нинә мине "атаманка" тинең ул?"- тип һорау биргәйнем, ул: "Ә кем һуң йырҙарҙың һүҙҙәрен иң беренсе булып отоп ала?" - тип, мине тағы аптырауға ҡалдырҙы. Баҡтиһәң, уның уйынса, беренсе булыу, тимәк, "атаманка" булыу икән.

Ысынында, мин шиғыр булһынмы, йырмы - уларҙың һүҙҙәрен шунда уҡ отоп ала инем, шуға ла йырлашып алғыбыҙ килһә, ҡыҙҙар минең яныма йыйыла һала ине. Был хәлдән һуң бер-ике көн үткәс, өлкән төркөмдән Вәсилә исемле ҡыҙ килеп инде лә, мине етәкләп, мәктәпкә алып барҙы һәм: "Йырла!"- тип бойорҙо. Мин ҡурҡа-ҡурҡа шым ғына йырлап бөткәс, Вәсилә: "Матур йырлайһың былай, тик тауышың тонoҡ", - тип, үҙҙәренең бүлмәһенә ҡунаҡҡа алып инеп китте лә карауатына ултыртты. Шунан ул карауаты аҫтынан зәңгәр төҫкә буялған фанера сумаҙанын дөбөр-шатыр һөйрәп сығарҙы. Асып ебәргәйне, унда тәгәрәшеп йөрөгән бер нисә баш һуғандан башҡа бер ни ҙә юҡ икәнен күрҙем. "Бар, кухнянан бер ус тоҙ алып кил!" - тип мине сығарып ебәрҙеләр. Шунан беҙ бер һуғанды әрсеп, тоҙға мана-мана, күҙ йәштәребеҙҙе һөртә-һөртә һыйландыҡ та, мин үҙ бүлмәмә ҡайтып киттем. Бер айҙан мин ул Вәсиләне тағы күрҙем. Ул бер ҡыҙ менән мәктәп сәхнәһендә ике тауышҡа матур итеп йырланы. Береһе - юғары, икенсеһе түбән тауышҡа. Мин ике тауыш ҡушылһа, йырҙың тағы ла матурыраҡ яңғырауына иҫем китеп һоҡландым. Күп тә үтмәй, беҙҙе 5-се балалар йортона күсерҙеләр һәм Вәсиләне мин башҡаса осратманым, ләкин уның мине "атаманка" булғаным өсөн хөрмәтләп, етәкләп йөрөүе, бары менән байрам тигәндәй, әсе һуған менән һыйлауы күңелемдә онотолмаç бер хәтирә булып ҡалды...

Йырҙарҙың, бигерәк тә боронғоларының һүҙҙәрен иғтибар менән тыңлайым мин, сөнки беләм: улар ғәҙәттә илебеҙ, халҡыбыҙ тарихын һөйләй. Йылдар һеүлән үтә бара, үкенескә, боронғо халыҡ йырҙарын дөрөҫ итеп, еренә еткереп йырлаусылар ҙа аҙ ҡалып килә. Йә йыр тарихы менән ҡыҙыҡһынмайҙар, йә көйөн боҙоп йырлайҙар. Әйткәндәй, яңыраҡ "Бөйрәкәй" тигән йырҙы "Тау һыртынан килә, эҙе юҡ", тип башҡарыуҙарын ишетеп ҡалдым. Ихтимал, был йырҙың төрлө варианты барҙыр, ләкин минең өсөн сәйер тойолдо: Бөйрәкәйҙең ниндәй эҙ ҡалырға тейеш икән һуң? Былай тип йырлағандарын ошоға тиклем ишеткәнем юҡ ине. Бер тыңлауҙа иҫемдә ҡалған вариантының һүҙҙәре ошолай ине:

*Иртәнсәккей тороп , мин ҡараһам,*
*Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй, Бөйрәкәй.*
*Бөйрәкәйҙе һауған ҡыҙ баланы*
*Өҙөлөп-өҙөлөп һөйә йөрәккәй, йөрәккәй.*
*Тау һыртынан килә мөңрәй-мөңрәй,*
*Һауыммы еткән, һауыр ҡыҙы юҡ, ҡыҙы юҡ...*

Ошо йырҙы тыңлайым да, илай-илай ҡушылып йырлайым. Бөйрәкәйҙе һауған ҡыҙ баланы үҙем һымаҡ тип хис итәм. Мөңайған саҡтарында йәш менән ҡуша һағышты һығып сығарырға, күңелдәребеҙҙе сафландырырға әлдә, тимен, йырҙарыбыҙ бар...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

УЙМАҠ ХИКӘЙӘЛӘР

*Хәйҙәр ТАПАҠОВ*



# ЙӨК АТЫ

Совхоздың Үҙәк бүлексәһендә бер ат булды. Йөк аты, былай-алайым, күрер күҙгә күрмәлекле йөк аты. Ауылда кешеләрҙең генә түгел, ҡош-ҡорттоң, мал-тыуарҙың йөрөп ятыуы, тереклек итеүе ус төбөндәгеләй асыҡ шул: ылдым тартҡандарҙы, сығынламағандарҙы баҫымсаҡлайҙар, ғәҙәттә, ул өҙлөкһеҙ еккелә йөрөнө, көндөм генә ауыр арбаларҙы өҫтөрәне, иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә баш баҫып, көтөү көттө, бесән осоронда косилканың мисәүендә түгел, иң төбөндә көсәнде, унан ҡалһа, тырмаға баҫтырҙылар, әй беренсә тиерлек йөрөтөп, күбә тарттырҙылар.

Йәшәйеш ҡанундары шундай - ерҙәге әйбер, тереклек мәңгелек түгел, ваҡыт үтеү менән бер килеп туҙа, ҡартая. Күрмәлекле ат ваҡыт үтеү менән баҡтаһы елдә туҙыраған, нур ҡайтҡан күҙҙәренән субырҙап йәштәре аҡҡан, ҡабырға һөйәктәре ҡырғыстай беленгән ҡараҫҡыға әүерелдә. Көсҡарыуы ҡайтҡас, элекке хеҙмәттәрен иҫәпкә алыптыр инде, уның нимәһен кимерәһең дә, мөнйөйһөң тағы тип, ҡамытын һалдырып, дағаларын ҡуптарып ирекҡә ебәрҙеләр. Шул хәлдә лә үҙен кәрәклегә иҫәпләп, башҡа аттарҙан, өйөрҙән тотам да ҡалмай эт һымаҡ эйәреп йөрөнө алаша. Өйөр башлығы айғыр ҙа уны ҡабул итте, ситкә тибәрмәне. Көнө буйы шулай йөрөй, сарсаһа, шишмәнән һыу эсә, асыҡһа, ҡырҙағы, баҫыу буйында үҫкән ҡарағураны ашай, мәгәр артыҡ тамаҡ булғыһы килмәгәндер, күрәһең, трактор тәгәрмәсенән әтмәләнгән һауытҡа ҡойолған һолоға һис ҡасан ҡағылманы.

...Бер танышым пенсияға сыҡты. Ул да иртәнән алып кискә ҡәҙәр фәҡәт хеҙмәт тип янған кеше ине. Телендә лә, уйында ла нимәнеләр матур итеп, сифатлы итеп ваҡытында атҡарыу йә башҡарыу. Һаман да ул үҙен кәрәкле кеше итеп иҫәпләй, йәнәһе лә, уның донъя шыпа ла алға бармай, емерелә, юҡҡа сыға. Иртән эш башланғас та берәй йомош табып, сығып китә, төшкә аш та башҡаларҙыҡылай бер сәғәт, кис етте иһә, эшем эйәһеләй арып-талып ҡайтып инә.

Бер көн ул миңә шылтырата:

- Эш тип йөрөп, гәзит-мажар уҡығаным, телевизор ҡарағаным юҡ. Тиҙҙән байрам көндәре бит, нисә көн ял итәбеҙ ул?..

Теге, аттарҙың артынан эйәреп йөрөгән элекке йөк аты күҙ алдыма килеп баҫты...

ИНТЕРНЕТТАН



# ҒҮМЕРҘЕ ОҘАЙТА

■ Ауыҙ ҡыуышлығына металл биҙәүестәр тағыу периодонтитҡа килтерә, был ауырыу һөҙөмтәһендә тештәр ҡойолоуы ихтимал. Германияның Грайфсвальд университеты ғалимдары ошо хаҡта иҫкәртә. Университет хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәрҙә тел һәм ирен пирсингы булған 408 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың һәр бишенсеһендә бер нисә пирсинг булып, даими рәүештә металл биҙәүестәр йөрөткән. Араларында 19 йыл биҙәүес таҡҡандар булған. Ауыҙ ҡыуышлығында даими рәүештә металл булыуы тештәр, теш ҡаҙнаһына шул тиклем кире йоғонто яһауы асыҡланған. Пирсинг, бигерәк тә телдәге пирсинг теш ҡаҙнаһының йәрәхәтләнеүенә, ҡанауына килтерә, ҡаҙна тамыры асыла. Былар теште урынында тотоп тороусы бәйләүсе туҡыма - периодонтит билдәләре. Пирсингты оҙағыраҡ йөрөткән һайын, ауыҙ ҡыуышлығы нығыраҡ ҡаҡшай. "Стоматологтар пирсингтың зыяны тураһында халыҡты иҫкәртергә тейеш. Кем металл биҙәүес йөрөтә, уларға бынан баш тартырға кәңәш итәбеҙ", - ти ғалимдар.

■ Иртә үлем хәүефен 40 процентҡа түбәнәйтеү мөмкинлеге биргән ысул асыҡланған. Ул сәләмәт йоҡо режимы. Көн һайын иртә ятып, иртә тороу хроник сирҙәргә аҙып китергә мөмкинлек бирмәй. Европа ғалимдары ете йыл дауамында 1750 кешенең сәләмәтлеген күҙәткән. Улар барыһы ла йоҡо режимы, көн дауамында яҡтылыҡ тәьҫире һәм физик әүҙемлекте күрһәтеп торған махсус прибор тағып йөрөгән. 1015 ҡатнашыусы йоҡо режимын тотҡан, 744-ендә йоҡо дефициты (тәүлегенә 7 сәғәттән аҙыраҡ) күҙәтелгән. Ошо осор эсендә ҡатнашыусыларҙың 176-һы вафат булған. Йоҡоһо туйған кешеләрҙә иртә үлем хәүефе 40 процентҡа түбәнерәк булыуы асыҡланған. Ғалимдар кәңәше буйынса, кеше тәүлегенә 7-9 сәғәт йоҡларға тейеш. 12 йәшкә тиклемге балалар 9-12 сәғәт, үҫмерҙәр 8-10 сәғәт йоҡлаһын. Йоҡо туймау йөрәк, бөйөр, ҡан тамырҙары сирҙәренә, диабет, инсульт, һимереү, депрессияға килтереүе ихтимал.

■ Сеченов университетының Йәмәғәт сәләмәтлеген өйрәнеү үҙәге 2022 йылда мониторинг үткәреп, рәсәйҙәрҙең яртыһында артыҡ ауырлыҡ күҙәтелеүен билдәләгән. Тикшеренеүҙәрҙә 2150 кеше ҡатнашҡан, респонденттарҙың уртаса йәше - 45 йәш. 52 процент кешенең ауырлығы тейешенән артыҡ, уларҙың 22 процентында һимеҙлек асыҡланған. Бөтөн донъяла был һан - 13 процент. Статистикаға ярашлы, айына килеме 20 мең булған граждандар төркөмөндә артыҡ ауырлыҡтары булғандар 30 процент һәм был категориялағы 30 процент кешелә һимеҙлек күҙәтелә. Шул уҡ ваҡытта, халыҡ үҙен физик йәһәттән ярайһы әүҙем иҫәпләй. 55 проценты аҙнаһына бер нисә тапҡыр спорт менән шөғөлләнә, 74 проценты спорт залына һирәгерәк йөрөй. Әммә ниндәйҙер ауырыу менән, мәҫәлән, диабет менән ауырыусылар араһында физик күнекмә яһаусылар 8 процент ҡына. Тап ауырыу кешеләр өсөн физик әүҙемлек күберәк кәрәк, шул саҡта ғына уларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ буласаҡ.

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

**Ҡайһы ваҡыт шулай ҙа була: көнө буйына арыған саҡтарҙа ла төндә керпек тә ҡаҡмай үткәрәһең. Йәки ятҡас та йоҡлап кителһә лә төн уртаһында уяндыра ла иртәнсәк йонсоп килеп тораһың. Йоҡоһоҙлоҡ сәбәптәре төрлө, ә шулай ҙа уның яртыһынан күберәге күңел тынысһыҙлығы, стресс, депрессия кеүек хис-тойғо проблемаларына бәйле.**

# ЙОҠОҺОҘЛОҠ



**Йоҡо режимының боҙолоуын өс төргә бүлеп ҡарай белгестәр:**

- йыш уяныу, өҙәк-һурыҡ, ҡыҫҡа йоҡо;
- ятҡас та йоҡлап китә алмау, был хәлдең бер йә ярты сәғәткә һуҙылыуы;
- төнгө йоҡонан һуң арығанлыҡ тойғоһо менән уяныу.

Үрҙә әйтеп кителгән эмоциональ сәбәптәрҙән тыш, йоҡо боҙолоу даими режим тотмауға, көндөҙ йоҡлап алыуға, алкоголь, кофеин, энергетик эсемлек йә булмаһа дарыу (антидепрессант, ауыртыныуҙы баҫыусы) препараттар ҡулланыуға, ятыр алдынан самаһыҙ ашауға бәйле. Етдиерәк сәбәптәре лә була: бөйөр, тын юлдары һәм йөрәк-ҡан тамырҙары, ҡалҡан биҙе, аллергия, ҡурылдай астмаһы, Паркинсон, психика боҙолоуы, яман шеш сирҙәре лә йоҡонан яҙҙыра. Йоҡоһоҙлоҡ эҙемтәләре йәшәйеш сифатын боҙа, эшмәкәрлек һәләтен, иғтибар туплауҙы, ҡарар ҡабул итеүҙе әкренәйтә. Даими йоҡоһоҙлоҡто дауаламау башҡа төрлө сирҙәргә, психиканың ҡаҡшауына килтереүе ихтимал. Шуның өсөн кисекмәҫтән табипҡа күренергә, әгәр:

- йоҡоһоҙлоҡ ике аҙнаға һуҙылһа һәм уны үҙаллы көйләү мөмкин булмағанда;
- даими йоҡоһоҙлоҡ арҡаһында өйҙә һәм эштә проблемалар килеп тыуһа;
- күкрәк тәңгәлендә ауыртыныу һиҙелһә һәм тын алыу ауырлашһа.

**Дауалау юлдары.** Табипҡа мөрәжәғәт итеү йоҡоһоҙлоҡ сәбәптәрен асыҡларға ярҙам итә һәм шуға ярашлы дауалау тәғәйенләнә. Дарыу препараттары ҡулланырға теләмәгән осраҡта ошондай саралар ҙа яҡшы ярҙам итә: психотерапия, фитотерапия, гомеотерапия, энә ҡаҙап дауалау, физиопроцедуралар (гидротерапия, климатотерапия, тын юлдарын асыусы приборҙар ярҙамында һ.б.). Дарыуҙарҙан табип кәңәше буйынса мелатонин, үлән дауалары (валериана) депрессияға ҡаршы препараттар, нейролептиктар, транквилизаторҙар, барбитураттар ҡулланыла. Тик ҡабатлайбыҙ: фәҡәт табип тәғәйенләүе буйынса! Йыш ҡына бындай дауалау ысулдары ҡулланмайынса, һыналған халыҡ дауалау саралары - шифалы үләндәр ярҙамында ла йоҡо сифатын көйләп була.

**Ошо йәһәттән бер нисә кәңәш:**

- әскелт алманан 200 г иҙмә әҙерләп, уға 1 балғалаҡ бал ҡушығыҙ һәм йоҡларға ятыр алдынан ашағыҙ;
- 2 аш ҡалағы бәпкә үләне (күгүлән - спорыш) онтағына бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2-3 сәғәт тотҡас, һөҙөп, көнөнә 5 тапҡыр берәр ҡалаҡ эсергә;
- берәр ҡалаҡ бәйғәмбәр тырнағы (календула), дарыу аҡсәскәһе (ромашка аптечная) һәм 2-шәр ҡалаҡ артыш менән бесәй үләнен (валериана) термоста 1 литр ҡайнар һыу һалып 3 сәғәт тотҡас, һөҙөп, көнөнә өс тапҡыр берәр стакан эсергә;
- бер ҡалаҡ аҡсәскәгә 1 стакан ҡайнар һөт ҡойоп, 30-40 минут тотҡас, һөҙөп, 1 балғалаҡ бал ҡушып болғатығыҙ һәм йоҡлар алдынан эсегеҙ (ике аҙна шулай дауам итергә);
- 2 ҡалаҡ ваҡланған салат үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 сәғәт тотҡас, йоҡларҙан алда тигеҙ өлөшкә бүлеп, 2-3 тапҡыр эсергә;
- 4:1 нисбәтендә киптерелгән ҡыҙыл миләш емеше менән бөтнөк япрағын термоста 0,5 литр ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт тотҡас, сәй урынына эсергә.

**Йоҡоно үҙаллы көйләү ысулдары:**

- көн режимын тәртипкә һалығыҙ: бер үк ваҡытта йоҡларға ятып, бер үк ваҡытта тороғоҙ;
- арыуығыҙҙы һиҙеп, йоҡоғоҙ килгәс кенә ятығыҙ;
- көндөҙ йоҡлауҙан тыйылып тороғоҙ. Айырыуса көндөҙгө сәғәт 4-тән һуң ятып йоҡлау йоҡоһоҙлоҡҡа килтерә;
- кис йоҡо гормоны - мелатонин бүленеүҙе көсәйтеү маҡсатында өйҙә йоҡо алдынан ярым ҡараңғы ут ҡабыҙығыҙ, телевизор, компьютерҙы һүндерегеҙ;
- йоҡо бүлмәһендә утты һүндерегеҙ йә булмаһа, күҙҙәрҙе махсус битлек менән ҡаплағыҙ;
- йоҡо бүлмәһен елләтегеҙ;
- йоҡларҙан 4-6 сәғәт алдараҡ кофе, алкоголь эсмәгеҙ, тәмәке тартмағыҙ;
- киске ашты еңелсә һәм йоҡларҙан 2-3 сәғәт алдараҡ ашағыҙ;
- йоҡлар алдынан 1 стакан йылы һөт йә бал ҡушылған һыу эсегеҙ;
- киске мәлдәрҙә ауыр физик һәм аҡыл эше менән шөғөлләнмәгеҙ;
- йоҡо алдынан саф һауала йөрөп инегеҙ;
- йоҡо алдынан ылыҫ экстракты, эфирлы лаванда, бөтнөк майы һалып ванна инегеҙ;
- йоҡлай алмаған хәлдә, "йөҙгә тиклем" һанау менән булышмағыҙ, йылы, матур хәтирәләргә бирелегеҙ.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# МӘКТӘПКӘ...

## ҡырағай хайуандар "эйәләшкән"



**Эйе, эйе, Бөрйән районының Иҫке Монасип мәктәбенә ҡырағай хайуандар эйәләшкән, улар хәҙер мәктәп хеҙмәткәрҙәре булдырған "Бөрйән урманы" паркында "йәшәй".**

Тәү ҡарашҡа ысын урман йәнлектәре тип уйларһың Гөлфирә Көнәфинаның был ижад емештәрен. Мәктәп директоры Данил Ҡотлобаевтың идеяһы менән булдырылған парк мәктәп биләмәһенә айырыуса йәм өҫтәй. Эшкә нисек тотонғандары тураһында Данил Камил улы бына нимәләр яҙған үҙ сәхифәһендә:

"Кеше йөрәге - ул башҡа кеше үтә алмаҫлыҡ ҡәлғә. Әммә ошо ҡәлғәне ниндәй ҙә булһа юлдар, ысулдар менән яулап алыусы - ул шәхес. Ҡәлғәне инде үҙенең аҡылы, ялҡынлы һүҙе, иманының ныҡлығы һәм күрһәткән хеҙмәте менән ала алһа - ул инде, әлбиттә, оло шәхес! Аҙмы, күпме мәктәптә эшләгән дәүер эсендә коллегаларымдың һәр ҡайһыныһының шәхес икәненә инандым. Беҙ үҙ шәхестәребеҙҙе күтәрергә, баһаларға тейешбеҙҙер, тип уйлайым. Киләсәктә һәр береһе тураһында тәфсирләп айырым яҙып, таныштырып үтергә тырышырмын. Әлегә һүҙем Иҫке Монасип мәктәбендә күңелен биреп, бөтә көсөн һалып эшләп йөрөүсе уҡытыусыбыҙ Гөлфирә Азат ҡыҙы Көнәфина тураһында булыр.

Һәләте булған оҫталарға электән һоҡландым һәм һоҡланам. Кешене урын биҙәмәй, ә кеше эшен биҙәй, тигән кеүек, мәктәп алдын матурлау, киләһе быуынға нимәлер ҡалдырыу маҡсатында үҙебеҙҙең Бөрйән урманында йәшәгән йәнлектәрҙән торған парк эшләү уйы башыма килде. Гөлфирә Азат ҡыҙына был турала әйтеүем булды, "Беҙ булдырабыҙ!" тигән һүҙе мине тағы ла дәртләндереп ебәрҙе. Кәрәкле материалдарҙы йүнләп алыу менән эш башланып та китте. Башта Гөлфирә Азат ҡыҙы йәнлек, ҡоштарҙың һындарын төшөрөп сыҡты, ә оҫта ҡуллы Кәрим Рәүхәт улы Бикмәтов уларҙы "һә" тигәнсе тейешенсә итеп бысып та ҡуйҙы. Бына шунан һуң ысын мәғәнәһендә мөғжизә башланды ла инде. Гөлфирә Азат ҡыҙының тылсымлы ҡулдарынан әленән-әле яңы йәнлектәр ҡойоп ҡуйыла барҙы. Һәр береһе айырым һоҡланыуға лайыҡ ижад емеше улар. Бөгөнгө көндә мәктәбебеҙ егеттәре был йәнлектәрҙе ыҡсым ғына итеп урынлаштырып та ҡуйҙы. Ана шулай күмәк көс менән "Бөрйән урманында" исемле паркыбыҙ барлыҡҡа килде. Был йәнлектәр ашамай, эсмәй әммә ижад һәм матурлыҡ өлгөһө булараҡ хайран итә. Бына шундай һоҡландырғыс шәхес ул беҙҙең Гөлфирәбеҙ!"

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ДАУАЛАУҒА ҠАРАҒАНДА...

## сирҙе иҫкәртеү яҡшыраҡ



Өйәнәк (эпилепсия), көнсөллөк һәм сихыр кеүек сирҙәр Иблис аша килә, ул бит фәхешлек, боҙоҡлоҡ, яманлыҡ сығанағы. Тән сирҙәренә фалиж һуғыу, махау ауырыуы (проказа), түләмә (язва), аҡылдан яҙыу һәм башҡа шундай сирҙәр инә. Микробтар, ауырыу бактериялары, вирустар - былар бары тик сирҙең тышҡы сәбәбе генә. Бөтә сырхауҙың сығанағы - кеше тәненә ағыу өрөп индерә торған Иблис.

Сирҙәрҙән һаҡланғыһы килгәндәргә үҙҙәренең тәндәрен һәм йәндәрен шайтандан һаҡларға кәрәк. Бының өсөн "Аятүл-Көрси" уҡыу ләзем. Бәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Йоҡларға ятҡанда, "Аятүл-Көрси" уҡығыҙ, һеҙгә шул саҡта Аллаһы Тәғәлә тарафынан һаҡсы-фәрештә бирелер, шайтан иртәнгә хәтле һеҙгә яҡыная алмаҫ".

Шулай уҡ һәр ваҡыт "Бисмилләһи" ("Аллаһ исеме менән") тиергә кәрәк. Бәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Аллаһ исеме менән кеше өйгә ингәндә һәм Аллаһ исеме менән ашай башлағанда, шайтан әйтә: "Бында миңә ҡуныр урын, ашар ризыҡ юҡ икән". Әгәр ҙә кеше "Бисмилләһ"те әйтмәйенсә өйгә керһә, шайтан әйтә: "Бында миңә ҡуныр урын бар". Әгәр ҙә кеше "Бисмилләһ"һеҙ ашай башлаһа, шайтан: "Миңә бында ҡуныр урын да һәм киске аш та бар", - ти.

Шулай итеп, кеше "Бисмилләһ" рәхмәте менән үҙен, ғаиләһен, йортон һәр бер сирҙең ямանлығынан һәм бәлә-ҡазанан һаҡлай. Бөйөк һәм Ҡөҙрәтле Аллаһтың китабы тап былан ошо һуҙҙәрҙән башлана.

Әбү Һурайра (радыйаллаһу ғәнһү) тарафынан һөйләнгән бер хәҙистә Аллаһының Илсеһе (с.ғ.с.) әйткән: "Үҙ йорттарығыҙҙан ҡәбер яһамағыҙ. Ысынлап та, шайтан "Бәҡара" сүрәһе уҡылған йорттарҙан ҡаса".

Бер ваҡыт Аллаһ Илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғабдулла бин Хәбибкә (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: "Әйт". "Нимә әйтергә?", тип һораным мин. Ул әйтте: "Аллаһтың берлеге тураһында әйт, "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләрен иртәнсәк һәм кисен өсәр мәртәбә уҡы. Был һиңе барса ямանлыҡтарҙан һаҡлар". Икенсе бер хәҙистә Бәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренә төбәлеп әйткән: "Йә, Ғуҡбә, һиңә ике изге сүрәне өйрәтергәме? Ул "Фәләҡ" һәм "Нәс" сүрәләре. Йә, Ғуҡбә, йоҡларға ятыр алдынан һәм уянғандан һуң һәр ваҡыт шуларҙы уҡы. Ошо сүрәләр һаҡлаған кеүек, шайтандан һаҡлар нәмә юҡ".

Ошо сүрәләр шайтанды ҡыуалар, Аллаһтың рәхимлеләген үҙенә тарталар, бөтә тәнде тыныслыҡ, именлек менән тултыралар. Быны раҫлап, Аллаһы Тәғәлә "Нәхел" ("Бал ҡорто") сүрәһенең 98-99-сы аяттарында әйткән: "Эй, мөьмин бәндәм, әгәр Ҡөрьән уҡырға теләһән, башта "Әғүүҙү билләһи минәш-шәйтанир-ражиим" тип әйт. Әлбиттә, иман килтереп, шәриғәт хөкөмдәрен тулыһынса үтәү өсөн, Аллаһҡа тәүәккәл ҡылған хаҡ мөьминдәргә ул шайтандың ихтыяры юҡтыр, йәғни үҙенә эйәртергә көсө етмәҫ".

Әлбиттә, Иблис кешегә йәшерен генә бәлә-ҡазалар килтерергә һәм уның сирҙәренең сәбәпсеһе булырға тырышыр. Әгәр ҙә кеше, Аллаһы Тәғәләнән был яуыз дошмандан һаҡлауҙы һораһа, ысын күңелдән, ныҡлы иман менән Аллаһҡа ышанһа, шул ваҡытта Аллаһы Тәғәлә Үҙ рәхимлеге менән уны һаҡлар, һәм ул еңеллектәр менән сирҙәрҙән ҡотолор.

Аллаһтың һөйөклөһө - Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьән рәхмәте аша үҙ йөрәгенең терелеүен, күңеленең нурланыуын, бәләләрҙән, ҡайғыларҙан ҡотҡарыуын һораған. Шулай булғас, нисек инде Ҡөрьән шифа бирмәһен!

Сирҙәрҙән ҡотолоуҙың төп ысулы - Бөйөк һәм Ҡөҙрәтле Аллаһҡа зикер әйтеү (йәғни Аллаһты йыш иҫкә алыу). Аллаһы Тәғәлә "Рәғд" ("Күк күкрәү") сүрәһенең 28-се аятында әйткән: "Әлбиттә, Аллаһ зикере һәм Ҡөрьән вәғәзе менән генә күңелдәр ҡарар табыр", һәм шул ваҡытта йөрәктәр тынысланыр, күңелдәр асылыр, тәндәр ныҒыр, һәм Аллаһы Тәғәлә тарафынан кешегә һаҡсы бирелер, сөнки Аллаһы Тәғәләне иҫкә алған кешене Аллаһы Тәғәлә иҫкә алыр һәм һәр ваҡыт уның менән булыр. Аллаһ кешене һаҡлаған, нисек инде сир уны еңергә баҙнат ҡылһын? Ә Аллаһты иҫкә алмаған, Уға буйһонмаған, үҙ шәһүәттәренә батҡан һәм гел был донъя артынан ҡыуған кешеләр тураһында Аллаһы Тәғәлә "Зухруф" ("Алтын хазина") сүрәһенең 36-сы аятында былай әйтә: "Бәрәү Ҡөрьәнгә ышаныуҙан йәки уның менән ғәмәл ҡылыуҙан баш тартһа, Ҡөрьән юлына керергә теләмәһә, Беҙ ул кешене шайтанға тапшырырбыҙ, ул шайтан уға яҡын булыр, һис тә айырылмаҫ". Гонаһтан пак булған изгеләр һәм гонаһҡа батып бөткән яуыз йәндәр илаһи ғәҙеллек арҡаһында бер тигеҙ түгел. Шуға күрә изгеләрҙең тәндәре лә таҙараҡ, йөҙҙәре лә нурлыраҡ, сафыраҡ. Шуларҙың береһенән бының сере тураһында һораған, ул әйткән: "Изгеләр Рәхимле менән намаҙҙа, ураҙала тәҡүәлектә бергә ҡалалар һәм Ул уларға Үҙенең нурын бирә".

**"Ҡөрьән Кәрим менән үҙеңде дауала" китабынан.**

ШӘП ЯҢЫЛЫҠ!

# МИЛЛИ МУЗЕЙЫБЫҘҘА...

**Республиканың төп музейында "Китап фонды раритеттары" күргәҙмәһе үҙ эшен дауам итә. Күргәҙмәләге төп урынды Өфөлә "Китап-байрам" Халыҡ-ара йәрминкәһе сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров тарафынан Милли музейға һаҡлауға тапшырылған Усман Ҡөрьәне күсермәһе биләй.**



Иң боронғо ҡулъяҙмаларҙың береһе булған изге китаптың тарихы бик бай. Фараз итеүҙәренсә, Ҡөрьәндең стандарт текстарының беренсе биш ҡулъяҙмаһы өсөнсө хәлиф Усман (579-656) осоронда илдең төп ҡалаларына ебәрелә, ә алтынсы нөсхәһе хәлиф янында ҡалдырыла. XV быуатта Тамерлан үҙенең яулап алыу походтары барышында изге китапты Сәмәрҡәндкә алып ҡайта.

Урта Азия Рәсәй империяһы составына ингәндән һуң ҡулъяҙманы һаҡлап ҡалыу ниәтендә уны Санкт-Петербургка ебәрәләр. Бында китап императорҙың асыҡ китапханаһында һаҡлана. 1917 йылғы инҡилаптарҙан һуң, Петроград мосолмандарының һорауҙары буйынса, Усман Ҡөрьәне Бөтә Рәсәй мосолмандар советына тапшырыла һәм Өфөгә килтерелә. Ә 1923 йылда Төркөстан республикаһы вәкилдәре һорауы буйынса Совет хөкүмәте Ҡөрьәнде Урта Азия мосолмандарына ҡайтарыу һәм Ташкентҡа ебәреү тураһында ҡарар ҡабул итә. Бөгөнгө көндә ҡулъяҙма Ташкент ҡалаһының Муйи-Мөбәрәк мәҙрәсәһендә һаҡлана.

Усман Ҡөрьәненең берҙән-бер күсермәһе Башҡортостан Хөкүмәте һорауы буйынса Үзбәкстан Халыҡ-ара Ислам академияһы хеҙмәткәре Хәбибулла Солиев тарафынан эшләнә.

Артабан был ҡиммәтле экспонат республикабыҙҙың тәҙәлөп ятҡан Ҡусмә цивилизациялар музейына тапшырыласаҡ. Шуға тиклем барығыҙҙы ла изге китапты Башҡортостандың Милли музейында күреп ҡалырға саҡырабыҙ!

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺОРАҒЫҘ - АЛЫРҺЫҒЫҘ

## Аңдың беренсе торошо: тәжрибә менән һынау

Әгәр тормошоғоҙҙо ысынлап та мауыҡтырғыс, мажараларға һәм уңышҡа тулы итергә теләйһегеҙ икән, уға фәнни күҙлектән ҡарарға кәрәк. Был унда ышанысҡа урын ҡалмай тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, фән ышанысты инҡар итмәй, ә уның нигеҙе булып тора. Ышаныс өсөн иң ҙур ҡаршылыҡ - ул һеҙҙең аңығыҙҙың баштан уҡ иррациональ булып күренгән концепцияларҙы йәки күренештәрҙе танырға теләмәүе. Әгәр аңығыҙ рациональ аңлатма табыуҙан тотҡарланып, һәр кемдең тормошо идеаль булмағанына ышанһа, ышанысығыҙға "Һорағыҙ - алырһығыҙ" тигән тәҡдимде ҡабул итеүе тәбиғи булыр. Ул ваҡытта аңығыҙ был идеяға "илһамлы һәм файҙаһыҙ" тигән мөһөр таҡмаҫ. Һеҙҙең бурысығыҙ - донъяға ҡарашығыҙҙы барлыҡҡа килтергән ҡағиҙәләр һәм гипотезаларҙың дөрөҫлөгөн тәжрибә менән раҫлағанға тиклем ышанысығыҙҙы ҡағыҙышлы бөтөн нәмәне шик аҫтында тотоу. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һәр инаныуҙы фәнни йәһәттән тикшерергә тейешһегеҙ. Әгәр кемдер, аяҡ кейемегеҙҙе сисһәгеҙ, эштә энергия кимәлен күтәрә аласаҡһығыҙ тиһә, был турала артыҡ теорияға бирелеп, аҡыл һатырға, идея әйтеүсене ахмаҡлыҡта ғәйепләргә кәрәкмәй. Бөгөндән башлап һеҙ скептика әйләнергә һәм: "Был миңә нимә бирер икән, эшләп ҡарайым әле", - тип уйларға тейешһегеҙ.

Үҙегеҙҙең идеяларығыҙҙы, принциптарығыҙҙы һәм ҡағиҙәләрегеҙҙе һәр саҡ тикшерегеҙ. Ризыҡты билдәле бер ваҡытта ғына ашарға кәрәк тигән раҫлау хаҡмы икән - тикшереп ҡарағыҙ. Тормошоғоҙҙа үҙегеҙҙең һәм балаларығыҙҙың телмәренән "юҡ" тигән һүҙҙе алып ташлаһағыҙ нимә була? Көн оҙоно инстинкттарығыҙ буйынса йәшәп, бының өсөн аҡланмағаһыҙ нимә була? Бер нисә көн дөйөм ҡабул ителгән ҡараштарҙы инҡар итәһегеҙ нимә була? Тикшерегеҙ, тикшерегеҙ һәм тағы бер тапҡыр тикшерегеҙ. Анализламағыҙ, рациональ аңлатмалар эҙләмәгеҙ, бары тик эшләп кенә ҡарағыҙ.

Тарзанка менән һикереү тураһында нимә беләһегеҙ? Моғайын, барығыҙ ҙа телевизор экраны аша аяҡтарына оҙон һуҙылмалы бау бәйләп, башня йәки күперҙән һикергән экстремалдарҙы күргәндер. Тимәк, барығыҙ ҙа тарзанка тураһында беләһегеҙ. Әммә үҙегеҙ һикереп ҡарамайынса, был турала бер нәмә лә белмәйһегеҙ. Һеҙҙең был турала мәғлүмәтегеҙ бар, ләкин был экстремаль спорт төрөнөң ысынбарлыҡтағы йөкмәткеһен асмай. Шуға күрә түбәндәге ҡағиҙәне иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ: "Мин ишеткәнемдә онотам". "Күргәнемде хәтерҙә ҡалдырам". "Эшләгәнемдә аңлайым". "Нимәнелер ысынлап аңлау өсөн уны үҙең эшләп ҡарарға кәрәк!"

Ә хәҙер дөрөҫөн генә әйтегеҙ: тормошоғоҙҙа ысынға алып, хатта тикшереп тә ҡарамаған принциптарығыҙ күпме? Бер миҫал ҡарайыҡ: үҙ бизнесығыҙҙы башларға теләйһегеҙ. Бының өсөн тәүҙә бизнес-план төҙөргә, ылыҡтырғыс логотип уйлап табырға һәм реклама буклеты баҫтырып таратырға кәрәк, тип уйлайһығыҙ. Икенсе юл бар икәнлеген уйлап ҡарағанығыҙ булдымы? Иң уңышлы кешеләр бөтөнләй икенсе юл һайлаған. Йәки икенсе миҫал: һеҙ тәүҙә аҡса йыйып, һуңынан һатып алырға өйрәнгәнһегеҙ. Әммә былай тәжрибә фәнни йәһәттән раҫланған ғәмәл һәм кире ғәмәл тигеҙлегенә ҡаршы килә. Аҡса менән дә шундай уҡ хәл: ул ни тиклем күберәк сыға, шул тиклем күберәк килә. Һыу аҡҡан торбаны ҡаплаһағыҙ, һыу әҙерәк аға башлай; ни тиклем күберәк аҡса һалып ҡуяһығыҙ, шул тиклем аҡса ағымын ҡаплайһығыҙ. Ләкин бында һаҡ булырға кәрәк: аҡсағыҙҙы унға-һулға таратып, ғәмәлегеҙҙе үҙегеҙ ҙә бик ышанып етмәй генә физика ҡанунына һылтарға тырышһағыҙ, матди хәлегеҙҙе насарайтыуығыҙ ҙа ихтимал.

**Пьер МОРАСИ.**



## 17 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 1.15, 1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.50, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.15 Д/ф "Алексей Герман. Трудно быть с Богом". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 13.00.
13.00, 17.30 "60 минут". [12+]
14.00, 16.00, 20.00 Вести.
14.30 Вести. Местное время.
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [12+]
23.30, 0.20 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.10 XXXII Международный фестиваль "Славянский базар в Витебске".
2.45, 3.40 Т/с "Рая знает все!" [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 20.15, 20.30, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 "Атлас Баженова". [12+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**16.45 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Лучик". [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.00 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Иностранцы Донбасса". [16+]**
**0.00 Х/ф "Запах вереска". [16+]**
**1.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.15 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 18 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.15 Д/ф "Владимир Маяковский. Третий лишний". [12+]
1.15, 1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [12+]
23.30 Т/с "Тихий Дон". [12+]
0.20 Торжественная церемония закрытия XXXII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
1.20, 2.15 Т/с "Рая знает все!" [12+]
3.05 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.41 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.00 Интервью. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 23.45, 4.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00, 17.00, 5.00 "Автограф". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [6+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.30 Т/с "Лучик". [12+]**
**19.00, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Елкән. [6+]**
**21.15 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**0.00 Х/ф "Девочка из города". [12+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 19 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.15 Д/ф Премьера. "Главные слова Александра Ширвиндта". [16+]
1.15, 1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [12+]
23.30, 0.20 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 2.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**10.00 Әлләсе… [6+]**
**10.45, 23.45, 3.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**16.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 Т/с "Лучик". [12+]**
**19.00, 5.30 Вечерний телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Тормош. [12+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Автограф". [12+]**
**0.00 Х/ф "Счастье быть одной". [16+]**
**1.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.15 Спектакль "Не ломайте крылья". [12+]**
**3.30 Бәхетнамә. [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 20 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 18.10, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.55 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Миссия "Аметист". [16+]
0.15 Д/ф "Михаил Задорнов. "К отцу на край земли". [12+]
1.15, 1.50, 2.25, 3.05, 3.40, 4.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Грозный". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Счастье не за горами". [12+]
23.30, 0.20 Т/с "Тихий Дон". [12+]
1.05, 2.00 Т/с "Рая знает все!" [12+]
2.55 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Этно-краса. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [16+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Т/с "Лучик". [12+]**
**19.00, 5.30 Вечерний телецентр.[12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 Башҡорттар. [6+]**
**21.00 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Тем летом". [16+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Бесталанная". [12+]**
**4.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**4.15 Счастливый час. [12+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 21 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.35, 11.20, 14.15, 19.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
17.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.30 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. Музыкальный фестиваль "Белые ночи Санкт-Петербурга". День патриотической песни. [12+]
23.35 Х/ф "Роман с камнем". [16+]
1.35, 2.10, 2.45, 3.20, 3.55, 4.30, 5.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.40, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
15.05 Д/ф "Испанская Голгофа". [16+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Удивительные люди. Лучшее. [12+]
23.55 К 75-летию Михаила Задорнова. Просто концерт. [12+]
1.15 Х/ф "Любовь без размера". [16+]
2.55 Х/ф "Красавец и чудовище". [12+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на рус.яз.).**
**7.45, 8.45, 11.45, 14.45, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**8.00 Бай. [12+]**
**8.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**9.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**10.00, 18.00 "Йома". [6+]**
**10.30 Д/ф "Уфимский хоспис. История создания". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.00, 16.45 Специальный репортаж. [16+]**
**12.15, 19.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**12.45 "Алтын тирмә". [6+]**
**13.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**15.00 Лит-ра. [6+]**
**15.30 "Физра". [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30 "Дикая ягода". [12+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Кромовъ". [16+]**
**2.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.30 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**
**6.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 22 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 "Поехали!" [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Поединки. "Подлинная история Майора Вихря". [12+]
13.45 Т/с "Вариант "Омега". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Поём на кухне всей страной". [12+]
19.55 Премьера. "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Фабрика звезд". 20 лет спустя". [12+]
22.40 Х/ф "Мой друг Иван Лапшин". К 85-летию Алексея Германа. [12+]
0.35 Д/ф "Алексей Герман. Трудно быть с Богом". [16+]
1.30, 2.05, 2.40, 3.15, 3.50, 4.25, 5.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Черное море". [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Формула жизни". [12+]
0.40 Х/ф "Чужая женщина". [12+]
4.05 Х/ф "Будущее совершенное". [16+]
5.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.15 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Т/с "Бирешмә". [12+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**19.00 Интервью. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мосты округа Мэдисон". [16+]**
**2.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**3.15 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 23 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.35, 0.15, 0.55, 1.30, 2.05, 2.40, 3.15, 3.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.45 Х/ф "Пираты XX века". [12+]
15.20 Д/ф "К отцу на край земли". К 75-летию Михаила Задорнова. [12+]
16.10 "Михаил Задорнов: мысли и предсказания". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". [12+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с "Серебряный волк". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.10, 2.10 Х/ф "Мама, я женюсь". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Черное море". [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
22.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Д/ф "Испытание войной". [16+]
3.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 М/с "Нурбостан". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 Тамыр в Москве. [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [6+]**
**14.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.30 Үткән ғүмер. [0+]**
**15.00 "Дорога к храму". [6+]**
**15.30, 4.15 Историческая среда. [12+]**
**16.00 "Честно говоря". [12+]**
**16.45 "От этно до оперы". Концерт А. Искужиной и Зайнетдина. [12+]**
**18.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**19.00, 3.30 Әлләсе… [6+]**
**19.45, 21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Интервью. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Х/ф "Кинзя". [12+]**
**1.00 Спектакль "Семейный портрет с посторонним". [12+]**
**3.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 15 ИЮЛЬ - БАШҠОРТ АТЫ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**26-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Анапа. Ҡатының. Олатай. Баҫҡыс. Килен. Ағай. Алпама. Ҡыҙ. Әй. Быҙау. Сама. Рено. Тояҡ. Ҙур. Ир. Әне. Абаға. Екән. Ҡорт. Туғай. Әсә. Атаң.

**Вертикаль буйынса:** Кейәү. Эт. Орлоҡ. Ике. Нисбәт. Ҡарт. Көндәш. Аран. Натрий. Ҡанат. Ҡур. Ул. Ҡайны. Ашуғ. Алыш. Арба. Бала. Ҡоҙағый. Сарыҡ. Ҡоҙа. Сабата. Рәт.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Июль (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (29) дүшәмбе | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 18:48 | 21:40 | 23:10 |
| 18 (30) шишәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 18:48 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (1) шаршамбы | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 18:47 | 21:37 | 23:07 |
| 20 (2) кесе йома | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 18:46 | 21:36 | 23:06 |
| 21 (3) йома | 3:39 | 5:09 | 13:30 | 18:45 | 21:34 | 23:04 |
| 22 (4) шәмбе | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 18:43 | 21:33 | 23:03 |
| 23 (5) йәкшәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 18:42 | 21:31 | 23:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*АФАРИН!*

## ИҢ ҘУР УРАМАНЫ...



Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә уҙған Рәсәй һәм Беларусь төбәктәре форумында Ғафури районының аш-һыу оҫталары донъялағы иң ҙур урама бешергән. Башҡортостан флагы төҫөндәге милли ризыҡтың бейеклеге - 3,2 метр, ә ауырлығы - 250 килограмдан ашыуыраҡ. "Беҙ быны эшләнек! Ғафуриҙар донъя рекорды ҡуйҙы! Республиканың кулинарҙар, ресторатороҙар һәм отельерҙар ассоциацияһы рәйесе Наталья Чибрикина әйтеүенсә, уны рәсми рәүештә теркәйҙәр", - тип яҙҙы социаль селтәрҙә Ғафури районы башлығы Фәнзил Сынғыҙов.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!




# БАЛАЛАР УЙЫНСЫҒЫН - ҮҘЕБЕҘҘӘ

**Быйыл май аҙағында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә уйынсыҡтар һәм өҫтәл уйындары етештереүселәрҙе бергә туплау бурысын йөкмәткәйне. Шуға ярашлы, август айында Өфөлә "Әйҙә уйнарға" Бөтә Рәсәй уйындар фестивале ойоштороласаҡ.**

Башҡортостандың Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығында 16-20 августа Өфөлә уҙырға тейешле "Әйҙә уйнарға" беренсе Бөтә Рәсәй уйындарына әҙерлек һәм уны ойоштороу мәсьәләһе буйынса эш кәңәшмәһе үтте. Унда Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева, мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Максим Ульчев, Рәсәйҙең балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһы президенты Антонина Цицулина, Башҡортостандың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры урынбаҫары Олег Тыщенко, Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Спорт министрлығы, Өфө хакимиәте вәкилдәре ҡатнашты. Кәңәшмәлә улар сараға әҙерлек йәһәтенән бик күп мәсьәләләрҙе тикшерҙе, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.

"Етештереүселәрҙең Рәсәй баҙарынан китеүе урындағы етештереүселәр өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Шуға күрә балалар өсөн күңел асыу тауарҙары етештереү өлкәһендә ошондай ҙур сара үткәреү республикабыҙҙа әлеге сәнәғәт тармағын әүҙемләштерергә ярҙам итәсәк. Халыҡ-ара саралар уҙғарыу йәһәтенән тәжрибәбеҙ етерлек, шуға фестиваль юғары кимәлдә үтер тип ышанабыҙ", - тип билдәләне Маргарита Болычева.

Антонина Цицулина һүҙҙәренсә, "Әйҙә уйнарға" фестиваленең төп маҡсатлы аудиторияһы - балалы ғаиләләр. Балалар тауарҙары индустрияһы предприятиелары ассоциацияһы президенты биш көнлөк фестивалдә төп пленар сессия менән профессиональ эшлекле программаға һәм әүҙемлектәр менән асыҡ өлөшкә бүлеү тәҡдимен индерҙе.

Мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Өфөлә күмәк мәҙәни саралар ойоштороу үҙенсәлектәре менән уртаҡлашты. Ул уйындар һәм уйынсыҡтар менән бәйле башҡорт персонаждарын һәм әҙәби әҫәрҙәрен файҙаланыу концепцияһын тәҡдим итте. "Билдәле артистар уҡыуында киске әкиәттәр, балалар китаптарының геройҙары менән оҫталыҡ дәрестәре, гастрозона, ҡурсаҡ театрҙары, уйын перфомансары. Милли музейҙа һирәк осраған боронғо уйынсыҡтар күргәҙмәһен әҙерләйбеҙ", - тип пландары менән таныштырҙы Әминә Шафиҡова.

Фестивалдә тотош илдән балалар уйындары һәм уйынсыҡтар етештереүселәр ҡатнаша. Шулай уҡ республикабыҙҙың "Альтернатива", "Спектр", "Умка" йәмғиәттәре продукцияһы менән таныштырға һәм һатып алырға мөмкин буласаҡ.

✓ *Оло аҡыл - муйынға бау, бәләкәй аҡыл - аяҡҡа бығау.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕН...

## таныттып, баһалатып ҡайттыҡ

**Ошо көндәрҙә Абхазияның Сухум ҡалаһында "Алтын майҙан - Абхазия" халыҡ-ара милли мәҙәниәттәрҙең инклюзив фестивале уҙғарылды. Унда Республика халыҡ ижады үҙәге "Атайсал" мәҙәни үҙәгенең "Селтәр" башҡорт халыҡ кейеме халыҡ студияһы ла ҡатнашты һәм төрлө номинацияларҙа юғары баһаға лайыҡ булдылар. Халыҡ студияһының етәксеһе Фатима Хәйретдинованан был сара һәм унан алған тәьҫораттар тураһында һораштыҡ.**



**"Алтын майҙан - Абхазия" фестиваленән алған тәьҫораттарығыҙ менән бүлешегеҙ әле: сара нимәһе менән айырылып торҙо?**

- Фестивалдән тик яҡшы ғына тәьҫораттар алдыҡ, барыбыҙҙың да күңеленә хуш килде ул. Сара 3-9 июлдә Сухум ҡалаһында уҙғарылды, һәр көнө ваҡиғаларға бай, ҡыҙыҡлы булды. Уны Абхазия Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Татарстандан "Алтын майҙан" интерпроекты, Сочи ҡалаһынан "ВИВА" яуаплыгы сикләнгән йәмғиәт Абхазиялағы Рәсәй хеҙмәттәшлеге (Россотрудничество) һәм Евразия халыҡтары ассамблеяһы ярҙамында ойошторҙо. Төп маҡсаты, әлбиттә, халыҡтарҙың милли мәҙәниәтен һаҡлау, күрһәтеү, үҙ-ара дуҫлыҡ ептәрен нығытыу булып тора. Быйыл фестивалдә Ҡаҙағстандан, Ҡарасай-Черкес, Сыуаш, Төньяҡ Осетия-Алания, Башҡортостан, Татарстан, Бүрәт, Тыва, Абхазия республикаларынан, Ярославль, Новосибирск өлкәләренән, Пермь крайынан, Санкт-Петербург һәм Мәскәү ҡалаларынан 500-ҙән ашыу коллектив ҡатнашты. Шәхсән минә улар араһында төрлө йәштәге кешеләр булыуы оҡшаны: ололар, урта йәштәгеләр һәм балалар тупланған ижади коллективтар сығыш яһаны. Шорҙар килгән, был халыҡты тәүгә күреүебеҙ булды. Инклюзив фестивалдә һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәр ҙә ҡатнашты, бигерәк тә һаңғырау балаларҙың ҡул хәрәкәттәре ярҙамында йыр башҡарыуы хайран итте. Шулай уҡ һөнәри һәм үҙешмәкәр фольклор коллективтар айырымланып торманы, бөтәбеҙ ҙә бергә матур итеп сығыштар яһаныҡ, аралаштыҡ.

Беҙҙең коллектив өсөн фестиваль бик уңышлы, енеүҙәргә бай булды: "Аламыс" халыҡ-ара конкурсында "Этник мода театры. Башҡорт кейемдәрендә дефиле", "Халыҡ вокал башҡарыуы", "Атмосфера" халыҡ-ара ижади форумында "Хореография. Йола-байрам бейеүе. Ансамбль" номинацияһында, "Алтын майҙан - Абхазия" фестиваленең "Биҙәү-ғәмәли ижад. Халыҡ кәсептәре әйберҙәре", "Хореография. Тарихи халыҡ бейеүе. Ансамблдәр", "Донъя халыҡтары йолалары. Этнокис" номинацияларында I дәрәжә лауреаттары тип танылдыҡ. Шулай уҡ беҙгә фестивалдең "Милли мәҙәниәттең ижади мираҫын һаҡлаған өсөн" махсус призын тапшырҙылар. Беҙ "Бер ҡартлыҡта, бер йөшлектә", "Кәкүк сәйе" бейеүен, "Уралым" йырын башҡарҙыҡ, "Бала ҡарға" хореографик спектаклен күрһәттек. Сығыштарҙы Зөлфиә Ҡудашева менән Гүзәл Мамина әҙерләне. Студиябыҙҙың ағзаһы Мәрйәм Юлдыбаева "Ашҡаҙар" йырын оҫта башҡарыуы өсөн "Вокал. Халыҡ йыры" номинацияһында - өсөнсө, ә мин 1812 йылғы Ватан һуғышы ваҡиғаларына бәйле "Аҫылбикә" тигән тарихи бейеү менән I дәрәжә лауреат дипломына лайыҡ булдым. Шулай уҡ "Фестиваль бриллианты" тигән махсус приз һәм Рәхмәт хаты менән бүләкләнеүемде, коллективыбыҙға Рәсәй театр эшмәкәрҙәре берлеге грамотаһы тапшырылыуын тулҡынланып ҡабул иттем. Ғөмүмән, көслө ижади коллективтар араһында Башҡортостанды, башҡорт халҡын лайыҡлы күрһәтә алыуыбыҙ менән шатбыҙ, күтәренке кәйеф менән тыуған яҡтарға ҡайттыҡ.

Әйткәндәй, фестивалдән һабантуй, "Киске уйын" сараларында, Рәсәй Ҡораллы көстәренең хәрби базаһында шәфҡәтлек концертында ла ҡатнаштыҡ. Һабантуйҙа үҙебеҙҙең көршәк ярыу, тоҡ менән һуғышыу, тоҡ кейеп һикереү, йоморҡа менән йүгереү кеүек матур башҡорт уйындарын уйнатыуҙан тыш, бар халыҡты хайран итеп, ҡатын-ҡыҙҙар көрәшен ойошторҙоҡ. Ә "Киске уйын"да иһә, башҡорт халыҡ бейеүҙәре буйынса оҫталыҡ дәресе, Учалы яҡтарына хас булған "Марш" уйынын күрһәттек. Уйынды Гүзәл Бүләк ҡыҙы Мамина тормош иптәше Рим һәм ейәне Урал менән бик матур итеп сағылдырҙы. Шәфҡәтлек концерты менән барыуыбыҙҙан илебеҙ тыныслығын һаҡлаусы ир-егеттәребеҙ ҙә, уларҙың күңелдәрен күрә алғанға үҙебеҙ ҙә ҡәнәғәт. Хәрби базала хеҙмәт итеүселәр араһында яҡташыбыҙҙы ла осраттыҡ, бик ҡыуанып ҡалды.

**Быңдай фестивалдәрҙең әһәмиәтенниҙә күрәһегеҙ?**

- Тәү сиратта, халыҡ-ара хеҙмәттәшлек, дуҫтарса мөнәсәбәттәр төҙөүгә, төрлө быуын кешеләрендә милли мәҙәниәттәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, рух уятыуындалыр. Ә беҙҙең өсөн ул - яңы үрҙәргә әйҙәүсе маяҡ кеүек. Сөнки ошонда төрлө тарафтарҙан килгән кешеләр менән күрешеп, аралашып, үҙебеҙҙең эште күрһәтеп, башҡаларҙан фәһем алып ҡайтабыҙ. Киләсәктә "Селтәр" халыҡ студияһының эшен тағы ла нығырaҡ йөнләндереп ебәреүгә барлыҡ көсөбөҙҙө һалырға, балалар менән эшләүгә күберәк иғтибар бүлергә ниәт итеп торабыҙ. Үҙебеҙ белгәндәрҙе үҙ иш быуынға тапшырыуҙың мөһимлеген быға тиклем дә аңлай инек, әле тағы ла нығырaҡ инандыҡ. Әлбиттә, үҙебеҙҙең дә эштең һөҙөмтәһен асыҡ күрә алдыҡ: башҡорт милли кейемен тарихи ысынбарлыҡҡа тап итеп, төп нөсхәләрендә тергеҙеү йәһәтенән беҙ башҡа халыҡтарҙан алда барабыҙ икән. Былай ҙа матур милли кейемдәребеҙгә һоҡланып ҡараусылар, ҡыҙыҡһынып әңгәмә ҡороусылар күп булды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Атайсал" мәҙәни үҙәгенең "Селтәр" башҡорт халыҡ кейеме халыҡ студияһы үҙенең әҙәм эшмәкәрлеге менән күптән билдәле. Башҡорт халҡының рухи һәм матди мираҫын һаҡлауҙа, киң ҡатлам кешеләренә танытыуҙа, йәш быуынға өйрәтеүҙә күрһәткән хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ. Уларҙың фиҙаҡәрлеге һәр эрҙә лайыҡлы баһаланыуына шатланырға һәм артабан да емешле ижад теләргә генә ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

---

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҘЕЛ КИСМӘЙЕНСӘ...

## аяғыңды киптермә

Оло аҡыл - муйынға бау, бәләкәй аҡыл - аяҡҡа бығау.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ир кешегә мотлаҡ ҡатын кәрәк, сөнки ул донъялағы бар ғәйепте бары тик хөкүмәткә генә яңһара алмай бит.

**(Леонард Левинсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер таш юныусы оҫта йәшәгән. Ул үҙе менән дә, үҙенең йәмғиәттәге урыны менән дә бер ваҡытта ла риза булмаған, гел зар түккән. Быңа бер саҡ ул бик бай сауҙагәрҙең өйө янынан үтеп бара икән. Ихата эсенә күҙ һалһа, унда затлы йыһаздар, башҡа әйберҙәр күҙенә салынған. "Их, мин дә шундай бай һәм ҡеүәтле сауҙагәр булһам ине..."- тип уйлап та өлгөрмәгән, ул, ысынлап та, Хоҙай ҡөҙрәте менән бай сауҙагәргә әйләнгән. Уның байлығына бар тирә-яҡтағылар көнләшкән, үҙе кеүек байҙар уның менән дуҫлашыу юлдары эҙләгән.**

**Быңа бер саҡ был бай сауҙагәрҙең өйө янынан ғына һалдаттар, ҡолдар оҙатыуында батшаның яҡындары, вәзирҙәре ултырған ат арбалары бер сафҡа теҙелеп үтеп китә. Ҡаланың бар кешеләре, шулай уҡ байҙары ла, был кешеләр алдында хөрмәт менән баш эйергә тейеш була. Әлеге сауҙагәр һыныңа ингән таш юныусы ла уларға ошондай уҡ хөрмәт күрһәтә. Ә күңеленән генә: "Их, быңа кемдә ҡеүәт! Мин дә батша эргәһендә йөрөгән бер вәзир булһам ине..." - тип уйлай. Шул арала уның был теләге тормошҡа ла аша.**

**Быңа ул бик текә вәзир булып, һалдаттар уратыуында һыбайлап урам буйлап китеп бара. Тирә-яҡтағыларҙың барыһы ла уға хөрмәтләп баш эйә. Ләкин эҫе ҡояш аҫтында уның хәле бөтөп китә. Ҡояшҡа күтәрелеп ҡарай. Ә ҡояш бер ни булмағандай ергә утлы нурҙарын ҡаҙауҙы дауам итә. "Быңа кемдә икән ул иң ҙур ҡеүәт! - тип уйлай вәзир. - Ҡояш булғым килә!" Уйлап та өлгөрә, ҡояшҡа ла әйләнә. Ҡыҙыу нурҙары менән ерҙе, баҫыуҙарҙы көйҙөрөп, крәҫтиәндәрҙең ҡарғышына дусар була. Ләкин үҙенең был ҡеүәтенә шатланыуы оҙаҡҡа бармай, бер саҡ оло ҡара болот килеп, ҡояшты ҡаплай ҙа, ергә ямғырын яуҙыра. Ҡояш уның аша нурҙарын ергә төҙәргә нисек кенә тырышмаһын, булдыра алмай. Шунда ҡояш һыныңдағы әлеге таш юныусы: "Быңа кемдә ҡеүәт! Минең болот булғым килә!" тип ҡыҫҡырып ебәрә һәм теләге шунда уҡ тормошҡа аша. Шулай ул болотка, артабан болотто ҡыуып йөрөтөүсе елгә әйләнә. Елгә ҡаршы тора алған ҡая ташты күреп, ошо икән иң ҡеүәтлеһе, тип уйлап, ҡая ташҡа әйләнә.**

**Быңа бер саҡ ҡая ташты сүкеш менән сүкеүҙәрен ишетеп, үҙ тәнендә ниндәйҙер үҙгәрештәр барлыҡҡа килеүен һиҙеп, "Минән дә көслө кем бар икән тағы?" тип уйлай һәм аҫҡа күҙ һалһа... унда үҙенең тәүһынын - таш юныусыны күреп ҡала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 июль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 935

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.